ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-5 апрель - май (алағарай - һабанай) 2023

№16 (1058)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Төрлө милләт балалары...**
башҡорт телен уҡый



5

**Һинең менән иҫәпләшһендәр өсөн...**
үҙенде эшең менән күрһәт!



8-9

**Башҡорт телен...**
әсә һөтө менән һендерҙем



11

**Күңеле менән шағир,**
һөнәре буйынса математик



12

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тиғән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Өфөбөҙ урамдары, ихаталары сып-сарҙан таҙарып, күркәмләнеп, йәмләнеп ҡалды. Был эштә һинең дә ҡатнашлығың булдымы? Ни өсөн беҙ бындай эштәр махсус хеҙмәттәр, урам һепереүселәр генә бурысы тип ҡарайбыҙ?***

***Илшат ЗАРИПОВ, "Тамаша" журналының баш мөхәррире:*** Беҙ ғаиләбеҙ менән йыл да үҙебеҙҙең йорт алдын йыйыштырырға, матурларға тырышабыҙ. Фатир алғанға тиклем Әй урамы, 90 адресы буйынса урынлашҡан ятаҡта йәшәгәндә лә, студенттарға ҡушылып булһа ла, үҙебеҙ генә булһаҡ та, коменданттың әйткәнен дә көтөп тормай, гел тирә-яҡты таҙартырға сыға инек.

Ниңәлер беҙ гел генә үҙебеҙҙең уңышһыҙлыҡтарҙа кемделер, нимәнелер ғәйепле итергә тырышабыҙ, төрлө сәбәптәр эҙләйбеҙ бит. Ябай ғына миҫал: башҡорт теленә өйрәтмәйҙәр, уҡытмайҙар, тип тәрбиәселәрҙе, уҡытыусыларҙы әрләйбеҙ, ғәмәлдә, балаларыбыҙ менән өйҙә башҡортса һөйләшмәһәк, сабый сағынан телебеҙгә һөйөү тәрбиәләмәһәк, уларҙы бер кем дә телде яратырға ла, ошо телдә һөйләшергә лә өйрәтә алмай. Шуның кеүек, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең өлгөлә йәшәгән еренде, тирә-яҡ мөхитенде таҙа тоторға, ошо эштәрҙе башҡарған кешеләрҙең хеҙмәтен баһаларға, хөрмәт итергә ғаиләлә үк өйрәтмәһәк, быларҙы сит кеше генә һеңдерә алыуы икеле.

Шуға күрә, һәр кем үҙ йорто алдында үҙенә оҡшағанса эшләргә һәм был эште балалары менән бергә башҡарырға, уларҙы ла хеҙмәткә өйрәтеп үҫтерергә тейеш. Ошо хеҙмәт тәрбиәһе аша беҙ балаларыбыҙҙа илһөйәрлек, тәртип, матурлыҡты күрә белеү сифаттары тәрбиәләйбеҙ ҙә инде.

Икенсе яҡтан, торлаҡ-коммуналь хеҙмәт эшсеһе килеп, йорт алдарын һинә кәрәккәнсә, башҡортсалап әйткәндә, ялап-һепереп, гөлдәр ултыртып, буяп, аҡлап китә алмай. Улар үҙенә күпме йөкмәтелгән - шунса ғына эшләй. Үкенескә күрә, бында уларҙы артыҡ ғәйепләп тә булмай, сөнки йәмғиәттә берәү ҙә артыҡ йәки түләнмәгән эш эшләргә тырышып тормай. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшселәре башҡарған эш оҡшамай икән, уларҙы әрләп, уны үҙеңсә эшләтергә тырышып, нервыңды бөтөрөп, дошманлашҡансы, иң яҡшыһы - үҙең сыҡ та саф һауала рәхәтләнеп үҙеңсә эшләп, һуңынан эшкә киткәндә, эштән ҡайтҡанда ошо эшенден һөҙөмтәһенә һоҡланып, ҡыуанып, ғорурланып, күңелең күтәрелеп, шатланып йөрө. Бер кеше бер нәмә лә ҡыйрата алмай, тиһәләр ҙә, яйлап барыбер ҡушылыусылар табыла.

## АФАРИН!

# БЕҘҘЕКЕЛӘР...

## тик беренсе урын яулай!

**Күптән түгел Таулы Алтай ҡалаһында Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының туған телдәре буйынса төбәк-ара олимпиада уҙғарылды. Алтай Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан икенсе тапҡыр ойошторолған ярышта Алтай, Башҡортостан, Бүрәт, Саха (Якутия), Тыва һәм Хакас республикаларынан уҡыусылар ҡатнашты. Беҙҙең республика данын биш вәкил яҡланы һәм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан 10-сы класс уҡыусыһы Алтынай Атанғолова олимпиадала беренсе урын яуланы.**




(Дауамы 6-сы биттә).

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ХӘҮЕФҺЕҘ БИЛӘМӘЛӘР



**Өфөлә был аҙнала ҡала парктарын һәм йәшел зоналарҙы эшкәртеү тамамланды, тип белдерҙеләр Республика дезинфекция үҙәгендә.**

Үҙәк хеҙмәткәрҙәре был көндәрҙә Еңеү паркында (уның майҙаны 18,8 гектар), Ботаника баҡсаһында (21 гектар) һәм Калинин исемендәге паркта (68 гектар) эшләнә. Шулай уҡ С. Юлаев исемендәге баҡса, Республика йорто алдындағы сквер, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы парк, Нефтехимиктар, "Ҡашҡаҙан", Якутов исемендәге, "Тулҡын" парктары, Еңеүҙең 50 йыллығы скверы, Гастелло исемендәге сквер, Полесье һәм Непейцев дендропарктары биҫтәһе эргәһендәге урман, Ленин исемендәге майҙан һәм Ғафури исемендәге парк, Нуғай ҡасабаһы (25 гектар майҙанда), Урмансылар паркы (116 гектар) эшкәртелде. Шулай уҡ Өфөнөң 11 пляжын эшкәртеү планлаштырыла, йәйге миҙгел башланыр алдынан был биләмәләрҙә талпандарҙы һәм башҡа паразиттарҙы юҡ итәсәктәр.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛДАРЫБЫҘҘЫ ЙӘШӘТЕРГӘ!

***Урал БУЛАТОВ, "Ҡурай даны" милли телевизион премияһына лайыҡ булыусы эшҡыуар, Стәрлебаш районы Иҫке Ҡалҡаш ауылынан:*** Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң атай-әсәйемдең үҫемлекселек буйынса эшен дауам итергә булдым. Баштараҡ бер аҙ ауыр ҙа булды, әммә бала саҡтан был эште күреп, өйрәнеп үҫкәс, барыһы ла тиҙ генә яйға һалынды. Сөнки 12-13 йәштән трактор йөрөтөргә өйрәнеп, ер һөрөргә лә сыға инем. Әле беҙҙең хужалыҡта мендән артыҡ гектар ер, унда бойҙай, арпа, көнбағыш, ҡарабойҙай сәсәбеҙ. Ун биш кешене эш менән тәьмин итәм, оло-оло ағайҙар бик дәртләнеп эшләй. Былтырғы йыл беҙҙең өсөн бик уңышлы булып һөйөндөрҙө һәм бер гектарҙан 70 центнер арпа, 50 центнер бойҙай, 30 центнер көнбағыш һуғып алдыҡ.

Ҡайһы бер хужалыҡтар менән сағыштырып, беҙҙең эшебеҙҙең һөҙөмтәһе юғарыраҡ булыуын күргәс, тағы ла дәртләнеберәк эшләге, хужалыҡты ҙурайтып, бөтә ауылды дәртләндереп, эшкә тотондорғом килә. Сөнки колхоздар бөтөп, бер нисә йыл ауыл ерендә эш булмай торған арала төрлө яҡҡа таралып китеп, йөрөп эшләргә йәки ҡалаға күсеп китеп йәшәргә күнеккән ауылдаштар. Кемдәрҙер ай һайын ғаиләһенән айырылып, Себерҙә эшләп ҡайта бит инде. Ә теләге һәм тырышлығы булған кешегә ауылда, үҙебеҙҙең тыуған ерҙә мөмкинлектәр күберәк булыуын белеп етмәйҙәр. Тир түгеп эшләп мал табып, ҡаланыҡыларға ҡарағанда ла яҡшыраҡ йәшәргә була.

Әлбиттә, үҫемлекселек менән шөғөлләнеү өсөн дә эштең айышын белергә, был өлкәлә белемле булырға кәрәк. Шунһыҙ, тота килеп шәхси хужалыҡ булдырып, тиҙ генә эшләп китеүе лә ауыр. Ауыл хужалығы техникаһы ла осһоҙ түгел. Тәүҙә бәләкәйҙән башлайһың инде, ҡапыл ғына ҙур килем дә алмайһың. Беҙ техниканы йыл да яңыртып торабыҙ, бына әле сит илдә сығарылған дискатор алып ҡайттыҡ, ул үҙе генә 3 млн һумдан ашыу тора. Ауырлыҡтарға ҡарамайым, йәшлек көсө, дәрте менән алға ынтылам. Шулай уҡ тиҫтерҙәремдең күбеһенең ауыл ерендә төпләнергә тырышыуын күреп һөйөнәм. Араларында бер һыйырҙан башлап малын ишәйткән, күпләп ҡош-ҡорт тотҡандар ҙа бар.

Әйткәндәй, беҙҙең Стәрлебаш районында буш ятҡан баҫыу ерҙәре юҡ ул, был йәһәттән фермерҙар афариндар. Хатта элекке кеүек ауыл хужалыҡтары киренән тергеҙелеп, яңырыу кисереп, халыҡ дәррәү эшкә тотоноп, ауылдарыбыҙ йәнләнеп тә китер һымаҡ. Бына беҙҙең ауылда ла балалар баҡсаһы, мәктәп, медпункт та бар, федераль юл буйында ғына урынлашҡанбыҙ. Республикабыҙҙың башҡа төбәктәрендә лә эштәрҙе шулай яйға һалып, ауылдарыбыҙҙы тергеҙеп, ауыл хужалығы тармаҡтарын үҫтерергә теләгән йәш көстәр табылһа, бик яҡшы булыр ине. Дәрт итеп эште башлап ебәреүсе бер кеше генә кәрәк, яйлап башҡалар ҙа сәмләнәсәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

БЫЛ АЙҘА...

# БӨЙӨК ЕҢЕҮ НАМЫҪЫН ҺАҠЛАРҒА!

**Ҡалын -ҡалын көрт тауҙары шәкәр ҡомо кеүек тиҙ иреп бөттө быйыл, ҡара ер асылғаны һиҙелмәй ҙә ҡалды. Тикмәгә түгел ине алағарайҙың бындай "тырышлығы". Үҙенең вариҫы - май-һабанайға ҡоролоҡ теләүе булдымы был? Унан килеп, апрель башы - урталарында бер нисә район һәм ҡалала буранлап ҡар яуып һалыуы, хатта ки Урал аръяғы трассаһының ҡайһы бер участкаларында юлдарҙы ябыу, транспорт хәрәкәтен сикләү… Көньяҡ Урал төбәктәрендә бындай көн торошо Бишҡунаҡ буранын иҫкә төшөрөп алырға ла сәбәп булды. Өҫтәүенә, апрель буйына көслө магнит бурандары теңкәгә тейҙе.**

Хәҙер түҙемһеҙләнеп майҙы көтәбеҙ: ниндәй холоҡ-фиғеле менән аптыратыр ул беҙҙе? Метеорологтар билдәләүенсә, быйылғы йыл Ҡояштың юғары әүҙемлеге менән башланып китте. 20 мартта NASA белгестәре Ҡояшта ифрат ҙур "тишек" хасил булыуын теркәне, ул телескопта ҙур ҡара тап булып бик асыҡ күренә. Ошо "тишек"-тән урғылған плазма Ерҙә ҡеүәтле магнит бурандары барлыҡҡа килтерә. Апрель тап ана шундай Ҡояш еле һөжүме аҫтында үтте.

Фаразлауҙарынса, Ҡояш еле әҙемтәләре май айын да урап үтмәйәсәк. Был ғәҙәти булмаған һауа торошо шарттарында сағыласаҡ. Үҙәк Рәсәй һәм уның төньяҡ-көнбайыш өлкәләрендә һауа температураһы ғәҙәттәгенән түбәнерәк һәм ҡойма ямғырҙар көтөлһә, Урал, Себер һәм Алыҫ Көнсығышта термометр бағанаһы, киреһенсә, юғары үрләп, урыны менән 30-35 градус эҫелек күрһәтәсәк, ти ФедералПресс эксперттары, әгәр уларға ышанырға яраһа.

**Ҡояштың быйылдан башланып киткән әүҙемлек ипкене ғалимдарҙы ла аптыраашта ҡалдыра. Улар аңлатыуынса, Ҡояштың әүҙемлеге 11 йыллыҡ циклдарға бүлеп ҡарала. Бер цикл (11 йыл) эсендә Ҡояшта 37 мең тапҡыр көслө тоҡаныу (вспышка) һәм 600-ләп магнит бураны күҙәтелә. Ҡояштағы иң көслө тоҡаныу ҡеүәтен бер нисә млн атом бомбаһы шартлауы менән сағыштырырға була, ти ғалимдар. Ерҙең магнитлығы, ионосфера һәм радиотулҡындар таралыу институты директоры В.Кузнецовтың аңлатыуынса, ошондай циклдың әле иҫәп буйынса 25-сеһе 2020 йылда башланған һәм 4-5 йылдан Ҡояш әүҙемлеге әкренләп баҫыла барасаҡ. Ҡояштың бындай үҙенсәлеге тәбиғи күренеш, ул даими рәүештә ҡабатланып то-**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Өфөбөҙ урамдары, ихаталары суп-сарҙан таҙарып, күркәмләнеп, йәмләнеп ҡалды. Был эштә һинең дә ҡатнашлығың булдымы? Ни өсөн беҙ бындай эштәр махсус хеҙмәттәр, урам һепереүселәр генә бурысы тип ҡарайбыҙ?***

***Шамил КУЧУКОВ, шәхси эшҡыуар:*** Быйыл, белеүегеҙсә, ҡышҡыһын ҡар бик күп яуҙы һәм ихатаны таҙартырға ошо йорттарҙа йәшәгән халыҡ менән бергәләшеп тотонорға булдыҡ. Был мәжбүри сара ине, сөнки ул ваҡытта йорт тирәһен хеҙмәтләндереүсе коммуналь хеҙмәттәрҙең техникаһы ватыҡ булды, улар ихатаны таҙартып өлгөрә алманы һәм беҙ уйлаштыҡ та, үҙебеҙ 300-әр һум аҡса йыйып, трактор яллап, йорттоң ергә-тирәһен таҙарттырып алырға ҡарар иттек. Көтөп ятҡансы, шулай еңелерәк булыр, тип уйланыҡ.

Ғөмүмән алғанда, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе милекселәр йорт эргәһен йыйыштырыуға, йәмләндереүгә идара компанияларына һәр ваҡытта ла аҡса күсереп тора, шуға күрә улар ошо эштәрен еренә еткереп башҡарырға тейеш. Мин йорт советы ағзаһымын, шуға күрә уларҙың байтаҡ ҡына аҡса алыуҙары тураһында хәбәрҙармын. Мәҫәлән, беҙҙең өйҙөң тирәһен йыйыштырыу, таҙа тотоу өсөн генә миллион һумдан ашыу аҡса йыйыла. Ысынбарлыҡта иһә, йыйыштырыусы, һепереүсе һирәк-һаяҡ ҡына килеп, арлы-бирле һепереп китә лә, шуның менән эштәре лә бөтә. Шуға мин һәр кем үҙ эшен еренә еткереп башҡарырға тейеш, тип уйлайым. Әгәр беҙ коммуналь хеҙмәт өсөн аҡса түләйбеҙ икән, ни өсөн үҙебеҙ улар өсөн эшләргә тейеш? Мин был йәһәттән дәүләт сәйәсәтен бөтөнләй аңламайым. Нисек инде, аҡса түләп тороп, үҙең эшлә. Улай булғас, улар нимәгә аҡса йыя? Беҙ - фатир хужалары - дөйөм милекте хәстәрләп, һаҡлап, уны боҙмаһындар, ҡыйратмаһындар, матур итеп ҡулланһындар һәм ҡулланыу ваҡыты оҙаҡҡа етһен тип, шуларҙы күҙәтеүҙә тоторға, ә коммуналь хеҙмәттәр алған аҡсалары өсөн хеҙмәт күрһәтергә тейеш.

Кемдәрҙең үҙенең ижади фантазияһын эшкә егергә - түтәл эшләргә, матур сәскәләр ултыртырға - теләге бар, былар инде ихаталарҙы йыйыштырыусыларҙың бурысына инмәй һәм уны үҙебеҙ эшләй алабыҙ. Беҙҙең йортта шундай бер-ике оло апай бар, улар шулай күңел талабы буйынса ихатала сәсәкәләр ултыртыу менән шөғөлләнә. Күрше-тирә һыу һибергә ярҙам итә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Рәсәйҙә оҙайлы май каникулдары булмай. 2023 йылда Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы дүшәмбегә тура килә. 29, 30 апрель һәм 1 май - ял көндәре. Һуңынан рәсәйҙәрҙе Еңеү көнө уңайынан 6-9 майҙа дүрт көнлөк каникул көтә. 8 май - 2023 йылдың 8 ғинуарынан (йәкшәмбе) күсерелгән ял көнө. Шуға шишәмбе 9 майҙа ғына түгел, ә дүшәмбе 8 майҙа ла ял итергә мөмкин. Быйыл майҙа бөтәһе 11 ял көнө. Шуларҙың һигеҙе - шәмбе һәм йәкшәмбе, тағы өсәүһе байрам көндәренә тура килә.

✓Башҡортостан Башлығы республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Еңеү көнөндә Өфөлә хәрби техника менән парад ойошторолаҫағын әйтте. Радий Хәбиров район хакимиәттәре башлыҡтарын Рәсәйҙең төп байрамын - Еңеү көнөн билдәләүгә ҙур иғтибар бирергә саҡырҙы. Республика Хөкүмәтенә байрамға әҙерлек барышы тураһында мәғлүмәт әҙерләргә ҡушылды. "Беҙҙә хәрби парад үткәрелә, балалар ҙа ҡарарға килә. Күнекмәләр була, был хаҡта мәғлүмәт бирегеҙ", - тине республика етәксеһе.

✓Республикала махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға белем алыуға сертификаттар тапшырыла башланы. Быйыл финансланған 700 сертификаттың 200-ө ошо категорияға ҡараған граждандар өсөн бүленгән. Ҡалғаны мәшғүллек үҙәктәрендә иҫәптә торғандар, декрет ялындағы ҡатын-ҡыҙҙар, эшен дауам итергә теләгән пенсионерҙар өсөн тәғәйенләнгән. Сертификаттың хаҡы ике тапҡырға артҡан һәм хәҙер 20 мең һум тәшкил итә. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн сумма күберәк - 50 мең һум.

✓Башҡортостан Башлығы указы менән Граждандарҙың йәшәү сифатын яҡшыртыу мәсьәләләре буйынса совет булдырылды. Советты Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров етәкләй, Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин һәм Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - финанс министры Лира Иғтисамова рәйес урынбаҫарҙары итеп тәғәйенләнде.

✓Башҡортостандың ике гимназияһына республиканың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың исеме бирелде. Башҡортостан Башлығының "Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың хәтерен мәңгеләштереү тураһында" указын үтәү маҡсатында Күгәрсен районы Мораҡ ауылының Башҡорт гимназияһы һәм Күмертау ҡалаһының 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты уның исемен йөрөтә башлай.

***✓ Ниндәй көс, ниндәй мөғжизә ярҙам итә һуң дошманды елкәһенән алып ташларға һәм өңөнә тиклем ҡыуып етергә? Тарихсылар Бөйөк Еңеүгә илткән биш төп сәбәпте атай, шуларҙың иң беренсеһе - илһөйәрлек.***




**ра, шуға күрә уның әҙемтәһе булараҡ, Ерҙәге ғәҙәттән тыш һауа торошо шарттарында ниндәйҙер мистика һәм заман ахыры билдәләре эҙләү, афәт -фажиғәләр юрауҙы фән ҡабул итмәй. Әйткәндәй, был планеталарҙы һәм уларҙың юлдаштарын, астероид, метеороид, комета һәм йыһан туҙанын үҙе тирәләй әйләндереп тороусы берҙән-бер йондоҙ - Ҡояш хаҡындағы әлеге кәлимә 3 майҙа билдәләнәсәк Бөтөн донъя Ҡояш көнөнә мәҙхиә булды, тип ҡабул итәйек, сөнки Ҡояшһыҙ Ер йөҙөндә тереклек тә булмаç ине. Бөгөн ҡояш батареялары ярҙамында уның энергияһы экологик таҙа электр сығанағы булараҡ сәнәғәт өлкәһендә генә түгел, ә торлаҡ, етештереү биналарын йылытыу өсөн дә файҙаланыла.**

Һабанайҙың еребеҙгә иң көләс һәм шатлыҡлы байрамдар алып килгән Яҙ һәм хеҙмәт **(1)**, Бөйөк Еңеү **(9)** көндәре лә күңел донъябыҙҙы ҡояш яҡтыһылай йылытып тора. Балалыҡ һәм йәшлек йылдарыбыҙҙа тороп ҡалған Беренсе Май демонстрациялары хәҙер инде икенсе бер донъя, икенсе бер планетала булған төш кеүек кенә тойола. Уның ҡарауы, был оҙайлы байрамда халыҡ хәҙер баҡсаһына, дачаһына ағыла: демонстрациянан бер ҙә кәм түгел. Элеккесә һауаға "ура" ҡысҡырып, яр һалмай ғына, ергә эйелеп, үҙ йүнен хәстәрләй, киләһе уңышҡа орлоҡ сәсә.

**Ә бына Бөйөк Еңеү байрамын бер ниндәй заман да, бер ниндәй көнсөллөк һәм хөсөттәр ҙә беҙҙең күңелдән ҡыуып сығара алмаясаҡ. Фашистик режимды өңөндә дөмөктөргән ул шанлы йылдар беҙҙән алыçайған һайын, был көн йөрәгебеҙгә яҡыныраҡ, әһәмиәтлерәк була бара. Советтар иленә Еңеү еңел бирелмәй. Гитлерҙың 5,5 миллион кеше иçәпләнгән армияһына ҡаршы тәүге көндәрҙә көнбайыш хәрби округтарҙа беҙҙең тере көс икеләтә кәм - 2,9 млн һалдатты тәшкил итә, хәрби техника буйынса ла көстәр айырмаһы ҙур була. Ҡыçҡаһы, дошман алдан ныҡлы әҙерләнеп, илгә баçып ингәндә, СССР-ҙан ике тапҡырға өçтөнлөклө көскә эйә була.**

Тәүге мәлдәрҙә ил яҙмышы ҡыл өçтөндә тороп ҡала. Ниндәй көс, ниндәй мөғжизә ярҙам итә һуң дошманды елкәһенән алып ташларға һәм өңөнә тиклем ҡыуып етергә? Тарихсылар Бөйөк Еңеүгә илткән биш төп сәбәпте атай, шуларҙың иң беренсеһе һәм берәгәйлеһе, әлбиттә, илһөйәрлек һәм тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ. Шуға өçтәп, фиҙаҡәрлек, тип тә өçтәргә кәрәк. Илен, тыуып үçкән йорт-ерен, ғаиләһен һөйгән кеше генә дошманға ҡаршы көрәштә йәнен фиҙа ҡылырға һәләтле. Быға Брест нығытмаһы диуарҙары ла шаһит: "Үлһәк тә бирелмәнек. Бәхил бул, Тыуған ил!"- тип ташҡа соҡоп яҙылған һүҙҙәр фиҙаҡәрлеккә һәйкәл. Хәрби начальниктар таланты, йәмғиәт берҙәмлеге, тышҡы сәйәсәт кеүек башҡа факторҙар ябай совет һалдаты менән тыл хеҙмәтсәндәре фиҙаҡәрлегенән башҡа хәл иткес көскә эйә була алыр инеме һуң?

**Еңеүсене хөкөм итмәйҙәр, тигән хәҡиҡәт бар, ләкин бөгөн илебеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышындағы хәл иткес әһәмиәтен кәметергә, тарихи иçтәлектәребеҙҙе кәмһетергә маташыусы Көнбайыш менән АҠШ хөсөтсөләре украин нацизмын Рәсәйгә һөсләтеп кенә ҡалмай, уның менән идара итә һәм Рәсәйгә ҡаршы кампанияла асыҡтан-асыҡ ҡатнаша. Тимәк, улар алдында Бөйөк Еңеүебеҙ намыçын, ҡаҙаныштарын беҙгә яҡларға, һаҡларға һәм, ихтимал, ҡайтанан раçларға, нығытырға тура киләсәк. Бөгөнгө илһөйәрҙәр алдында ана шундай ил яҙмышына тиң еңелдән булмаған бурыс тора...**

Һабанайҙа тағы ла түбәндәге иçтәлекле көндәр билдәләнә: Бөтөн донъя матбуғат азатлығы **(2)**, Акушерка **(5)**, Радио һәм бөтөн элемтә тармаҡтары, РФ Ҡораллы Көстәре булдырылған һәм Президент полкы көндәре **(7)**, Шәфҡәт туташы **(12)**, Урман ултыртыу, Ҡара диңгеҙ флоты **(13)**, Ғаилә, Халыҡ-ара климат **(15)**, Халыҡ-ара яҡтылыҡ **(16)**, Мәғлүмәти берҙәмлек **(17)**, Музейҙар **(18)**, Пионер ойошмаһы тыуған **(19)** көндәр, Бөтөн донъя бал ҡорто **(20)**, Филолог, Мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырау **(25)**, Рәсәй эшҡыуары **(26)**, Бөтөн Рәсәй китапхана **(27)**, Ил сиге һаҡсыһы **(28)**, Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көн **(31)**.

**ҺАБАНАЙҘА тыуғандар:**

**1 -** Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, педагог, "Киске Өфө" гәзитенең дуçы һәм йәмәғәт хәбәрсеһе **Фәүзиә Усмановаға - 80 йәш** (1943).

**6 -** М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич премияһы лауреаты **Алмас Әмировҡа - 55 йәш** (1968).

**12 -** М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Нәғим Нурғәлинға - 60 йәш** (1963).

**14 -** төҙөүсе, хужалыҡ эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, "Строймеханизация" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры **Нур Тажетдиновҡа - 60 йәш** (1963).

**15 -** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура һәм актер оçталығы кафедраһы мөдире, профессор, С.Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Таңсулпан Бабичеваға - 70 йәш** (1953).

**30 -** билдәле шағир һәм драматург, РФ һәм БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Рәмил Ҡолдәүләттең** (Дәүләтҡолов) тыуыуына - 65 йыл (1958-1998).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Өфөбөҙ урамдары, ихаталары суп-сарҙан таҙарып, күркәмләнеп, йәмләнеп ҡалды. Был эштә һинең дә ҡатнашлығың булдымы? Ни өсөн беҙ бындай эштәр махсус хеҙмәттәр, урам һепереүселәр генә бурысы тип ҡарайбыҙ?

***Айлина КАРАМОВА, урам һепереүсе:*** Баш ҡалала урам таҙартыусылар, урам һепереүселәрҙең билдәле бер өлөшө - ауылда эш булмағанлыҡтан, ҡалаға килеп, пенсияға тиклем эш тапҡан кешеләр. Кемдер дәүләт компанияларына бара, беҙ - шәхси компанияла эшләйбеҙ. Эш хаҡы уртаса 20-25 мең һум. Ауылда уныһы ла булмағас, риза булып йөрөйбөҙ инде.

Эштең ояты юҡ, аҡсаның еçе юҡ, тиһәләр ҙә, барыбер коммуналь хеҙмәт кешеләрен ҡала халҡы бик һанлап бармай, урамда әрләп китергә лә күп һорамайҙар. Һәр урам һепереүсенең нормаһы - алтышар-етешәр өй алдын таҙартыу. Йорттарҙа йәшәүселәр үҙҙәре өмә, санитар айлыҡ булғанда ла йәшәгән территорияһын таҙартырға, матурларға сығырға теләмәй. Сыҡҡандары ла эшләргә түгел, ә бармаҡ менән төртөп, нисек эшләргә, нисек эшләмәçкә икәнен өйрәтеп кенә йөрөй. Беҙ таҙартып китәбеҙ, артыбыҙҙан уҡ балкондан ул шешәләр, ул нәскиҙәр оса. Дөрөçөн әйткәндә, нимә генә осмай инде... Иртән тәмәке төпсөктәрен һепереп китәбеҙ - икенсе көн иртән барыуға тағы өйөлөп ята. Ирҙәр генә түгел, хатта ҡатынҡыҙҙар тәҙрә төбөнә ятып, тәмәке тартып, төпсөгөн тышҡа урамға ташлай.

Ер ҡарҙан асылыу менән өмә лә өмә беҙҙең өсөн. Ҡышын, йәй ял итерһегеҙ, тиҙәр ине, хәҙер, шәмбе ял һорамағыҙ, өмәләр була, эшләйбеҙ, тиҙәр. Йәйгеһен бер кем дә шәмбе ял иткәне юҡ.

Эш ҡоралдарының барыһын да: көрәк, тырма, һепертке - үҙ аҡсабыҙға һатып алабыҙ. Кемдең мөмкинлеге бар - улар ауылдан үҙҙәре һепертке бәйләп алып килә. Махсус кейемде нисәмә йыл инде күргәнебеҙ юҡ, эш бирсәткәләре былтырҙан алып бирелмәй. Йәшәү урыны - тынсыу подвал.

Граждандар ҙа, етәкселек тә, беҙ аҡса түләйбеҙ, эшләгеҙ, тиҙәр. Беҙ эшләйбеҙ, әммә эш кешеһенең хеҙмәтен әҙ генә булһа ла ихтирам итергә, эш күләменә ҡарап түләргә кәрәк бит.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан спортсылары 21-27 майҙа Чунцинда Рәсәй-Ҡытай йәйге йәштәр уйындарында ҡатнаша. Хәбәр ителеүенсә, Межгорье һәм Өфө спорт мәктәптәре тәрбиәләнеүселәре Иҙел Дәүләтбаев, Галина Мезенцева бадминтон буйынса милли йыйылма команда составына инде. Ярыштар Ҡытайҙың ҙурлығы буйынса дүртенсе ҡалаһында ойошторола. Бынан алдараҡ йәш спортсыларыбыҙ Санкт-Петербургта 19 йәшкә тиклемге юниорҙар араһында бадминтон буйынса Рәсәй беренселеге призерҙары булғайны.

✓Башҡортостанда тәүге ауыл хужалығы предприятиеһы яҙғы сәсеүҙе тамамланы. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәте буйынса, Илеш районының "Уңыш" тоҡомсолоҡ заводы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте эштәрҙең тамамланыуы тураһында отчет биргән. Ике аҙна эсендә хужалыҡ 6,2 мең гектар ерҙә яҙғы культуралар сәскән. Дөйөм алғанда, республикала 108 мең гектарҙан ашыу майҙанда сәсеү эштәре башҡарылған.

✓Йәй башында Магнитогорск менән Өфө араһында "Ҡарлуғас" юғары тиҙлекле электричка маршруты асыла. Был хаҡта Магнитогорск хакимиәтенең транспорт һәм коммуналь хужалыҡ идаралығына һылтанма менән Силәбе өлкәһенең "Губерния" порталы хәбәр итә. Рейстарҙың графигы һәм һаны һуңғараҡ билдәле була. Хәҙер "Ҡарлуғас" электропоезы "Көнбайыш экспресс" Өфө - Приют маршруты буйынса ла йөрөй.

✓Башҡортостандың почта бүлексәләре 1 майҙа - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамында эш графигын үҙгәртә. 1 май - республиканың барлыҡ почта бүлексәләре өсөн ял көнө. Почтальондар хаттарҙы һәм ваҡытлы матбуғат баçмаларын таратмай", - тип белдерҙеләр Федераль почта элемтәһе идаралығында. 2 майҙан почта бүлексәләре ғәҙәти режимда эшләй.

✓ОСАГО-һыҙ йөрөгән өсөн штрафты бер нисә тапҡырға арттырырға кәрәклеге тураһында белдереү менән финанс министры урынбаçары Алексей Моисеев сығыш яһаны. "Был 800 һум түгел, ә биш меңдән дә кәм булмаçҡа тейеш", - тине ул Федерация Советында үткән кәңәшмәлә. Шул уҡ ваҡытта физик һәм юридик шәхестәр өсөн штрафтарҙың артыуы ихтимал, тип министр урынбаçарының һүҙҙәрен килтерә РИА Новости.

✓ **"Еңеү паровозы" беренсе тапҡыр Куйбышев тимер юлы ҡалалары буйлап байрам турына юллана. 29 апрелдән 5 майға тиклем ете ҙур станцияларға - Өфө, Бөгөлмә, Яр Саллы, Ульяновск-Үҙәк, Рузаевка, Пенза-1 һәм Һамарға бара.**



ҠЫҪҠАСА

# ХӘРБИ ХЕҘМӘТКӘ...

**Республиканың йыйылыу пунктында егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә оҙатыуға арналған тантаналы митинг үтте.** Яҙғы саҡырылыш ваҡытында 120 һалдат Мурманск, Симферополь һәм Мәскәү өлкәһенә юлланды. Уларҙы һауа-йыһан көстәре, ҡоро ер ғәскәрҙәре көтә. Республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Ирек Сәғитов, Башҡортостан хәрби комиссариатының граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү һәм саҡырыу бүлеге начальнигы, полковник Сергей Нетунаев Ватанды һаҡлаусыларға өгөт-нәсихәт бирҙе. Хәрби комиссариаттың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, яҙғы саҡырылышта Башҡортостан Рәсәйҙең Ҡоралл Көстәренә 5,5 меңдән ашыу һалдат оҙата. Саҡырылыш ағымдағы йылдың 15 июленә тиклем дауам итә. Яҙғы саҡырылыш Украинала махсус хәрби операция үткәреү менән бәйле түгел. Ғәҙәттәгесә, ул закон менән билдәләнгән ваҡытта һәм план тәртибендә уҙғарыла.

✓ **Башҡортостандың хәрби комиссары Михаил Блажевич Республика идара итеү үҙәгенә биргән интервьюһында контракт буйынса хәрби хеҙмәткә 18 йәштән 60 йәшкә тиклемгe ир-егеттәрҙе ҡабул итеүҙәрен иҫкә төшөрҙө.** Шул уҡ ваҡытта кеше һирәк һөнәргә эйә һәм һаулығы ныҡ икән, йәш сиген 65 йәшкә тиклем күтәреүҙәре ихтимал. Тикшереү аҫтында булған йәки психоневрология диспансерында иҫәптә торған йә иһә табип-нарколог күҙәтеүе аҫтындағы кандидаттарҙың ғаризалары ҡаралмай, тип билдәләне Михаил Блажевич.

✓ **"Ватан" хәрби баҫмаһы" телеграм-каналы састың тәрбиә эше буйынса урынбаҫарының "Ватан" башҡорт отряды тураһында фекерен еткерҙе:** "Ватан" ирекле отрядының шәхси составы менән ҡәнәғәтбеҙ. Улар тәртипле, яуға инергә әҙер. Әгәр нимәлер аңлашылмай икән, һорауҙар бирәләр. Күҙҙәре янып тора, ни өсөн һәм ҡайҙа барғандарын аңлайҙар. "Ватан" отряды ҡуйылған бурыстарҙы лайыҡлы үтәр", - тип офицерҙың һүҙҙәрен килтерә "Ватан" хәрби баҫмаһы" телеграм-каналы. Замполит һүҙҙәренсә, хәрби саҡырылыш буйынса алынғандар ҙа, "Ватан" отряды яугирҙары янында хеҙмәт иткән контракттылар ҙа берҙәм булыуҙары менән айырылып тора. "Һәйбәт егеттәр. Улар өсөн иң мөһиме - коллектив. Берҙәмдәр һәм уларға бер ниндәй ҙә һорауҙар юҡ. Ошондай егеттәр күберәк булһын ине", - тип билдәләне часть командиры урынбаҫары.

✓ **Республикабыҙ туристарының тәүге төркөмө Минскиға осто. Сәфәр "Башҡортостан-Беларусь оҙон ғүмерлелеге" программаһы сиктәрендә бойомға ашырыла. Туристар менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тә осрашты һәм уларға уңышлы сәфәр теләне.** Пенсионерҙар һәм хеҙмәт ветерандары Радий Хәбировҡа һәм республика етәкселегенә "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһын тормошҡа ашырған өсөн рәхмәтен белдерҙе. Тыуған төйәгебеҙҙең, башҡа төбәктәрҙең һәм илдәрҙең иҫтәлекле урындары менән танышыу бик ҡыҙыҡлы, тип билдәләне улар. Проект сиктәрендә 2023 йылда Белоруссияға бөтәһе 1,3 меңдән ашыу кеше барыр тип көтөлә. "Башҡортостан-Беларусь оҙон ғүмерлелеге" проектында ҡатнашыусыларҙың тәүге төркөмө 46 кешенән тора, улар - Өфөнән, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрө, Дүртөйлө һәм Ҡыйғы райондарынан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ОҘАҠЛАМАЙ АСЫЛАСАҠ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йүнәлмәй торған сирле өлкәндәр һәм балаларға паллиатив ярҙам күрһәтәсәк Республика хосписы төҙөлөшөндә булып, өлкәндәр һәм балалар блоктарын, ашхананы ҡараны.**

Өфөнөң Инвестиция-төҙөлөш комитеты генераль директоры Марат Вәсимов һөйләүенсә, майҙансыҡта тип төҙөлөш-ҡороу эштәре тамамланған. Унын бер өлөшө хәйриә маҡсаттарында бушлай башҡарылды. Дизайнер эштәренә республика колледждарының ошо йүнәлештә белем алыусы студенттары йәлеп итәлде. Хоспис өсөн шулай уҡ медицина ҡоралмалдарының күбеһе алынған.

Башҡортостан Башлығы хосписта эш кәңәшмәһе үткәрҙе һәм унда учреждениены файҙаланыуға тапшырыу планы һәм уның артабанғы эше ҡаралды. Журналистар менән әңгәмәлә төбәк башлығы кәңәшмә эшенә һығымта яһаны: "Был хосписты асыу менән бәйле бөтөн һорауҙарға ла беҙ яуап таптыҡ. Беҙҙең ниәт хәҙер ошо йәй уны файҙаланыуға тапшырыу. Уйлауымса, июль айында уҡ бында тәүге пациенттар киләсәк, - тине Радий Хәбиров.- Хосписҡа ҡоралмалдарҙың 80 проценты һатып алынған да инде. Әле учреждениеның коллективы туплана. Беҙ шулай уҡ хосписты паллиатив медицина белгестәре әҙерләүсе уҡыу һәм фәнни нигеҙ буласағын да күҙҙә тотабыҙ. Башҡортостан дәүләт медицина университеты һәм Медколледж менән хосписта паллиатив ярҙам кафедраһы булдырыу турааһында килештек. Киләсәктә бында койкаурындар һанын арттырыу ҙа ҡарала. Хосписты төҙөүҙә ҡатнашҡан төҙөүселәргә һәм был эштә ярҙам ҡулы һуҙған меценаттарға ҙур рәхмәт".

# АЙЫҠЛЫҠ - ҘУРЛЫҠ

**Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында айыҡлыҡ рейтингында беренсе урынды яуланы, ә дөйөм Рәсәй таблицаһында 32-се урындан 16-сыға күтәрелде.**

Ыңғайға үҫештә "Айыҡ ауыл" конкурсының өлөшө ҙур. Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында үткән беренсе төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында һүҙ ошо хаҡта барҙы. "Был республика проекты ауыл халҡы әүҙемлеге һәм Башҡортостан Башлығының грант ярҙамы менән дүрт йыл инде уңышлы тормошҡа ашырыла. Күреүебеҙсә, айыҡ тормош алып барған, спорт һәм ижад менән шөғөлләнгән яҡташтарыбыҙ күбәйә. Айыҡ байрамдар һәм саралар йышыраҡ үткәрелә. Ауыл биләмәләрендә хәмер һатыу кәмей, иң мөһиме, контрафакт менән йәшерен сауҙа итеү юҡҡа сыға бара", - тип билдәләне республика Башлығы хакимиәте етәксеһе, "Айыҡ ауыл" республика конкурсының ойоштороу комитеты рәйесе Максим Забелин.

Конкурс Башҡортостанда демографик хәлгә лә ыңғай йоғонто яһаны. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Анна Таболина һүҙҙәренсә, "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан ауылдарҙа тыуым күрһәткестәре республика буйынса алып ҡарағанда күпкә юғарыраҡ. Фәнни-ғәмәли конференция төбәктең проектты тормошҡа ашырыу тәжрибәһен тотош илгә таратыу өсөн үткәрелде. "Рәсәй субъекттарының беҙҙең проектка ҡыҙыҡһыныуы бик ҙур. Беҙ төрлө төбәктәрҙән күп ғилми мәҡәләләр алдыҡ, шуға күрә бөгөнгә эш йомғаҡтары буйынса йыйынтыҡ баҫтырып сығарабыҙ. Был йыйынтыҡ Башҡортостан юлын ҡабатларға һәм төбәктәрҙә "Айыҡ ауыл" проектын ғәмәлгә ашырырға теләүселәр өсөн ҡуллanma булыр тип иҫәпләйбеҙ", - тине "Айыҡ ауыл" республика конкурсының ойоштороу комитеты рәйесе урынбаҫары, Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айыҡтколова.

# "ЕҢЕҮ ПАРОВОЗЫ" КИЛӘ



**29 апрелдә Өфөгә "Еңеү паровозы" килә. Составта Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы хәрби техника менән платформалар, "Үлемһеҙ полк"тың пассажир вагондары бар.**

"Еңеү паровозы" беренсе тапҡыр Куйбышев тимер юлы ҡалалары буйлап байрам турына юллана, тип хәбәр ителәр баш ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәтенән. 29 апрелдән 5 майға тиклем Куйбышев тимер юлында ойошторолған "Еңеү паровозы" ретро-составы магистралдең ете ҙур станцияһына - Өфө, Бөгөлмә, Яр Саллы, Ульяновск-Үҙәк, Рузаевка, Пенза-1 һәм Һамарға бара. Байрам турының дөйөм оҙонлоғо - 2,5 мең саҡрымға яҡын. Иң алда - байрамса биҙәлгән "Лебедянка" паровозы. Ретро-составҡа Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы хәрби техника менән платформалар, "Үлемһеҙ полк"тың пассажир вагондары тағыла. Һәр ҡалала үҙенсәлекле хәрби экспонаттар менән фотоға төшөргә, 1945 йылғы осорҙо сағылдырған реконструкцияла, фронттан ҡайтҡан һалдаттарҙы ҡаршы алыуҙа һәм байрам концертында ҡатнашырға мөмкин. Шулай уҡ ете тимер юл станцияһында, шул иҫәптән Өфөлә "Георгий таҫмаһы" акцияһы уҙғарыла. Башҡортостандың баш ҡалаһына "Еңеү паровозы" 29 апрелдә сәғәт 11-гә килеп етергә тейеш.

# СИТТӘ УҠЫҺАЛАР ҘА...

**Мәскәүҙә Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллеге майҙансығында "Яҡташ" йәштәр мәғариф форумы үтте. Республика етәксеһе Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә форумдың һәм баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарында белем алған студенттар менән ҙур эш алып барыуҙың әһәмиәтен билдәләне.**

- Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарында уҡыған йәштәребеҙҙе иғтибар үҙәгендә тотоу өсөн әҙмә-эҙлекле шөғөлләнә башланыҡ, - тине Радий Хәбиров. - Юғиһә, беҙҙең иң яҡшы сығарылыш уҡыусылары баш ҡалаға уҡырға инеп китә лә улар менән бәйләнеш өҙөлә. Улар бит Башҡортостандың киләсәге, бурысыбыҙ - даими бәйләнештәр, коммуникациялар булдырыу аша уларға уҡыған осорҙа ярҙам итеү. Улар үҙҙәре лә әүҙем, әлбиттә, шулай ҙа беҙҙең ярҙам кәрәк. Уларға республика турааһында һөйләйбеҙ. Ошо мөһим эш менән етди шөғөлләнеү зарур.

Башҡортостан Башлығы эш сәфәрҙәренең береһендә студенттар менән осрашыуҙы Хөкүмәт графигына индерергә, тармаҡ бурыстарын билдәләргә ҡушты. Дәүләт Йыйылышына һайлауға тиклем студенттар менән осрашыуҙы - Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, ә һайлауҙан һуң депутаттар үткәрергә тейеш. Осрашыуҙы Мәскәүҙә тулы хоҡуҡлы вәкиллек майҙансығында ойошторорға ҡушылды.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев "Кала халҡы аллеяһы"н ултыртыуҙа ҡатнашты. Унын һүҙҙәренсә, был - Октябрь проспектындағы иң оҙон йүкә аллеяһы. Ошо урамда 100 төптән ашыу ағас ултыртыу планлаштырыла, тип хәбәр итте Ратмир Мәүлиев. "Коллегаларыбыҙ менән 3-4 метрлыҡ һәм унан бейегерәк ағастар ғына ултыртабыҙ тип һөйләштек. Был аҙнала уҡ баш ҡаланың һәр районында яңы тематик аллеялар барлыҡҡа киләсәк", - тине Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев.

✓Өфөлә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 78 йыллығына арналған "Георгий таҫмаһы" акцияһы башланды. Георгий таҫмаһы - хәрби дан символы. Уны Бөйөк Ватан һуғышында еңеүселәрҙең ҡаһарманлығына ихтирам йөҙөнән кеймгә, йөрәк тәңгәленә тағалар. Өфөнөң Иреkмәндәр ассоциацияһы ағзалары был акцияла 2017 йылдан башлап ҡатнаша, ҡала халҡына ошо ваҡиғаның мөһимлеге турааһында иҫкә төшөрә, Георгий таҫмаһын нисек тағып йөрөү ҡағиҙәләре турааһында һөйләй.

✓Башҡортостандың 31 ҡалаһында һәм районында 29, 30 апрелдә һәм 1 майҙа ауыл хужалығы йәрминкәләре ойошторола, тип хәбәр иттеләр Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ындай йәрминкәләрҙә урында етештерелгән тәбиғи һәм сифатлы продукцияны баҙарҙағынан түбәнерәк хаҡҡа һатып алырға мөмкин. Дөйөм алғанда, Беренсе май байрамдарында сауҙа итеү өсөн 38 майҙансыҡ ойоштороla.

✓4 майҙа Еңеү паркында Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 78 йыллығына арналған, Өфө ҡала хакимиәте һәм "Молодежная газета" редакцияһы ойоштorган 74-се еңел атлетика эстафетаһы үтә. Йола буйынса, иң күп йүгереүсе йыйған номинация - "Тынысльҡ йүгереүе" буласаҡ, унда спорт ветерандары һәм һәүәскәр йүгереүселәр ҡатнаша. Сәғәт 12-лә ярыштар башланһа, тәшкә 1 тула 20 минутта "Тынысльҡ йүгереүе"нә старт бирелә.

✓Баш ҡалала Еңеү көнөнә арналған бик күп саралар ойоштороla, шуларҙың иң ҙуры - 9 майҙа була. Был көнгә Еңеү паркында сәскәләр һалыу, Октябрь проспектында парад, В. И. Ленин исемендәге майҙанда концерт, Рус драма театры алдындағы майҙанда хәрби техника күргәҙмәһе, кисен фейерверк планлаштырыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Беҙҙең белем усағында башҡорт балаларынан тыш, башҡа милләт балалары ла дәртләнеп, ихлас уҡып йөрөй. Бер ҙә башҡорт теле дәрестәренән ҡурҡып тормайҙар. Улар дәрестәрҙә үҙ теләктәре менән, күңелле итеп шөғөлләнәләр.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Башҡортостандың барлыҡ милли белем усаҡтарына билдәле һәм арҙаҡлы шәхестәр исеме бирелеп, улар тураһында хәтер мәңгеләштерелә. Ә уҡыу йорттарының исеме есеменә тура киләме, улар үҙҙәренең иңенә алған яуаплылыҡты тоямы, олуғ шәхестәребеҙҙең рухын ҡыуандырамы? Ошо һорауҙарға яуап табыу һәм белем усағы менән яҡындан танышыу маҡсатында Өфө ҡалаһының Ғәли Ибраһимов исемендәге "2-се Башҡорт лицейы" муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы директоры Миләүшә МЫРҘАҒӘЛИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ТӨРЛӨ МИЛЛӘТ БАЛАЛАРЫ...

## башҡорт телен уҡый

➔ **Былтыр-быйыл мәктәптәрҙә генә түгел, тотош йәмғиәттә илһөйәрлек темаһы етди һәм ныҡлы күтәрелә. Уҡыусылар күңелендә атайсалға, тыуған илгә һөйөү осҡонон нисек тоҡандыраһығыҙ?**

- Быйылғы уҡыу йылын беҙ ике Шайморатов класын асыуҙан башлап ебәрҙек. Бишенсе-алтынсы синыфтарҙан бөтәһе 48 уҡыусы шайморатовсылар сафын тулыландырҙы һәм декабрҙә матур итеп уларҙы тәбрикләү сараһын уҙғарҙыҡ. Шул уҡ маҡсаттан сентябрҙә һигеҙенсе класҡа кадет кластарына балалар тупланыҡ. Бөтәһе 25 ҡыҙ һәм егет сик буйы-кадет класына алынды. Улар февралдә ант ҡабул итеп, ысын кадет формалары кейеп, бөгөнгө көндә матур итеп уҡып йөрөйҙәр.

Илһөйәрлек - ул тәү сиратта тыуған илеңде яратыу булһа, балаға ил тойғоһо менән бергә тыуған телгә һөйөү ҙә һеңә. Был йәһәттән мартта "Биҙәк" тип аталған республика фестивале үткәрҙек. Ул тыуған телдәрҙе һаҡлауға, уларҙы популярлаштырыуға арналған бик ҙур сара булды. Унда республиканың белем усаҡтарынан 200-ҙән артыҡ ҡыҙ һәм егет ҡатнашты, улар халыҡ бейеүҙәрен, халыҡ йырҙарын башҡарып һәм халыҡ инструменттарында уйнап, үҙҙәренең оҫталыҡтарын күрһәтте. Был сараны беҙ Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто менән берлектә икенсе йыл рәттән үткәрҙек. БР Мәғариф һәм фән министрлығының календарь планына индерелгән был сара артабан йыл да уҙғарылыр тип ышанабыҙ. Шулай уҡ уҡыусыларыбыҙ быйылғы уҡыу йылында ҡала кимәлендәге башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһында бик әүҙем ҡатнашты. Туғыҙынсы кластың ике уҡыусыһы еңеүселәр рәтендә булды.

Ағымдағы уҡыу йылындағы сағыу сығыштарыбыҙҙың береһе - йыл һайын ҡалала үткәрелеп килгән шаяндар һәм отҡорҙарҙың "Шаяниум-2023" конкурсында гран-приға лайыҡ булған өс команда араһында беҙҙең лицей командаһы булыуы. Был беҙҙең көтөп алынған еңеү, сөнки нисәмә йылдар өсөнсө-икенсе урындарҙа килә инек. Быйыл, ниһайәт, иң ҙур наградаға лайыҡ булдыҡ. Шулай уҡ команда ағзаһы Ғарифуллина Юлиәнең "Иң яҡшы ҡыҙҙар роле" номинацияһында еңеү яулауы ла лицей өсөн ҡыуаныс.

➔ **Тәрбиә менән белем биреү дилбегәһен бер тигеҙ тартыу мөмкинме? Бөгөн илгә тәрбиәле һәм шул уҡ ваҡытта заманға тап килгән белемгә эйә шәхестәр кәрәк. Ә шәхесте, мәғлүм булараҡ, ғаилә, йәмғиәт тәрбиәләй. Ә уҡыусылар өсөн йәмғиәт - ул белем усағы. Һеҙҙә уҡытыу мәсьәләһенә ниндәй иғтибар бирелгән?**

- Быйылғы уҡыу йылында Өфө Фән һәм технологиялар университетының



Иҡтисад институты менән килешеү төҙөп, социаль-иҡтисади синыфтар астыҡ һәм юғары уҡыу йорто уҡытыусылары 10-сы класс уҡыусыларына дәрестән тыш лекциялар уҡып, балаларҙың иҡтисад, финанс, менеджмент, маркетинг өлкәһендә белемдәрен арттыра.

Ғөмүмән, республика вуздары менән тығыҙ бәйләнештә эшләп киләбеҙ. Инде икенсе йыл М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, вуздың база мәктәбе булып торабыҙ. Шул арҡала лицейҙа һигеҙенсе кластарҙа психологик-педагогик йүнәлештәге ике синыф эшләп килә. Ул кластағы балалар менән психология, педагогика буйынса кластан тыш саралар үткәрелә, университетка сәйәхәттәр ҡылына һәм оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашыла.

➔ **Кластан тыш саралар тигәндән, ниндәй ҡыҙыҡлы тәжрибәгеҙ менән уртаҡлаша алаһығыҙ?**

- Республикала иғлан ителгән "Инициативалы бюджетлау" конкурсында уҡыусылар үҙҙәре башланғыс күрһәтеп, проект яҙып, еңеп сыҡтылар. Шуның һөҙөмтәһендә лицейҙа "Ауаз" исемле медиаүҙәк астыҡ. Ҡыҙҙар һәм егеттәр унда үҙҙәренең талантттарын арттырасаҡ, ведеороликтар эшләп, интервьюлар алып, матур ыңғай контенттарҙа эшләп өйрәнәсәктәр.

Шулай уҡ төрлө оҫталыҡ дәрестәре үткәрелеп тора. Беҙ балалар менән осрашыуға бик күп сәнғәт әһелдәрен, йәмәғәт эшмәкәрҙәрен саҡырабыҙ. Республика халыҡ ижады үҙәге белгестәре килеп, ҡыҙҙарҙы башҡорт ҡатын- ҡыҙҙарының биҙәүесе - маңлайса эшләргә өйрәтте. Шулай уҡ ҡыҙҙар-егеттәр башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары менән осрашып, гитарала уйнау серҙәренә төшөндө.

➔ **Баланы тәрбиәләгәндә иң яҡшы һәм уңышлы алым - уға үҙең өлгө булыу. Уҡыусы ҙа уҡытыусыларынан өлгө ала. Коллективығыҙ хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтеп китегеҙ әле.**

- Уҡытыусыларыбыҙ ҙа бик әүҙемдәр, мәктәп тормошо уҡыусылар күңелендә яҡты хәтирә булып ҡалһын өсөн уны ҡыҙыҡлы итергә тырышалар, үҙҙәре лә төрлө конкурстарҙа ҡатнашып торалар. Күптән түгел коллектив менән Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды тарафынан үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә арналған квест уйында ҡатнашып, уңышлы сығыш яһаныҡ. Сараның Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында үтеүе көс-дәрт өҫтәне.

➔ **Лицей киләсәккә ниндәй пландар менән йәшәй?**

- Республиканың "Ҡанатлан!" программаһы буйынса лицейға финанс бүленде һәм бөгөнгө көндә беҙ яңы уҡыу йылына өлгөртөргә тип стоматология кабинеты булдырыу менән шөғөлләнәбеҙ.

Йәйге каникул ваҡытында өлөшләтә капиталь ремонт башланырға тора. Алла бойорһа, ниһайәт, лицейыбыҙҙың йөҙө үҙгәрер, йәмләнер, уҡыусылар һаны ла күбәйер, ата-әсәләр балаларын беҙҙең яңыртылған лицейға килтерер тип өмөтләнәбеҙ.

Бөгөн беҙ уҡыусыларыбыҙ һанын арттырыу буйынса эшләйбеҙ. Күп ата-әсәләр "Башҡорт теле дәрестәре күп уҡытыла", тип балаларын беҙҙең лицейға бирергә ҡурҡа. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең белем усағында башҡорт балаларынан тыш, башҡа милләт балалары ла дәртләнеп, ихлас уҡып йөрөй. Бер ҙә башҡорт теле дәрестәренән ҡурҡып тормайҙар. Улар дәрестәрҙә үҙ теләктәре менән, күңелле итеп шөғөлләнәләр. Беҙҙә башҡорт теле дәрестәре Мәғариф системаһының икенсе линия программаһы буйынса уҡытыла. Шуға күрә ҡурҡырға ярамай, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙа һәр балаға индивидуаль ҡараш бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Исемдәре Башҡортостандың белем усаҡтарына бирелгән шәхестәрҙең һәр береһенең үҙ сифаты, үҙ юлы, донъяға үҙ ҡарашы булған. Әммә уларҙы берләштереүсе бер уртаҡ һыҙат - ул илһөйәрлек, телһөйәрлек. Өфө ҡалаһының Ғәли Ибраһимов исемендәге "2-се Башҡорт лицейы"ның уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективы ла шәхес исемен лайыҡлы йөрөтә һәм аҡлай, тип, тулы ышаныс менән әйтергә була.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ФОНТАНДАР ЙЫРЛАЙ



**Байрам алдынан Өфөлә баш ҡала фонтандарын асыу тантаналары булып үтте.**

Мостай Кәрим исемендәге скверҙа, Опера һәм балет театры скверында - "Ете ҡыҙ", Салауат Юлаев һәм Совет майҙандарында, "Тирәктәр" скверында - "Бейеүсе торналар", "Ҡурай тотҡан малай", С. Орджоникидзе исемендәге майҙандағы һәм Йәштәр һарайы алдындағы, Ленин исемендәге парктағы һәм Ленин исемендәге майҙандағы - "Сәғәт", "Ҡашҡаҙан" ял һәм мәҙәниәт паркындағы фонтандар эшләй башланы. Фонтандар урынлашҡан биләмә Өфө халҡының да, ситтән килгән ҡунаҡтарҙың да иң яратҡан ял һәм күңел асыу урыны икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы әлеге тантаналарға йыйылған тамашасының күплеге. Көтөп алынған ваҡиға булараҡ ҡабул итте күптәр фонтан асыу сараһын.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һырғанаҡ

❖ Ревматизм, быуындар һыҙлағанда һырғанаҡтың (облепиха крушиновидная) 2 ҡалаҡ ваҡланған ботаҡтарына 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Һыҙланыу баҫыла.

❖ Кишеүҙән нәҙек кенә ботаҡтарын һындырып, шуның 1 ҡалағына 1,5 стакан һыу ҡойоп, ауыҙы ябыҡ һауытта талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға һәм йылыға төрөп, 2 сәғәт төнәтергә. Аҙ-аҙ уртлап, төнгөлөккә эсеп ятырға. Кишеү тейеп ауырый башлаған саҡта яҡшы ярҙам итә, температураны түбәнәйтә һәм хәлде яҡшырта.

### Шалҡан

❖ Миокард инфаркты осрағында бал ҡушылған шалҡан һутын көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар йәки стакандың өстән бер өлөшө миҡдарында эсергә. Шалҡан ашау ҙа файҙалы. Тиҙерәк һауығырға ярҙам итә.

❖ Ларингит булғанда, тауыш ҡарлыҡҡанда 2 ҡалаҡ шалҡанды ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын ғына утта 15 минут ҡайнатырға. Йылы көйөнсә көнөнә 4 тапҡыр сирек стаканлап эсергә. Һыуынған дауаны киренән йылытмағыҙ, саҡ ҡына эҫе һыу өҫтәгеҙ.

### Ҡурай еләге

❖ Аллергия булғанда 1 ҡалаҡ кипкән ҡурай еләге (малина) сәскәһенә 100 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Эсер алдынан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Астма ауырыуынан 1 ҡалаҡ урман ҡурай еләге тамырына 250 мл һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут быҡтырырға, һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө миҡдарында ризыҡланған арала эсергә.

### Һуған

❖ Быуындар ревматизмынан 3 баш ҙур һуғанды ваҡлап, 1 литр һыу ҡойорға һәм 15 минут ҡайнатып, һөҙөргә. Көнөнә 1 тапҡыр 1 стакан эсергә. Ауырыуҙан йүнәлтмәй, әммә һыҙланыуҙар тиҙ баҫыла.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Ҡушымта

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Ишмәкәй ауылы. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 25 см, аҫҡы киңлеге 38 см, ауырлығы 1400,0 г. Биҙәүестә барлығы 369 элемент. Шуларҙың 273-ө - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Ишмәкәй ауылы. Оҙонлоғо 48 см, өҫкө киңлеге 26 см, аҫҡы киңлеге 38 см, ауырлығы 1393, 2 г. Биҙәүестә барлығы 281 элемент. Шуларҙың 86-һы - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Ишмәкәй ауылы. Оҙонлоғо 45 см, өҫкө киңлеге 30 см, аҫҡы киңлеге 36 см, ауырлығы 1315, 8 г. Биҙәүестә барлығы 339 элемент. Шуларҙың 128-е - көмөш.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

АФАРИН!

# БЕҘҘЕКЕЛӘР...

## тик беренсе урын яулай!



**(Башы 1-се биттә).**

Олимпиада ике өлөштән торған: онлайн форматта үткәрелгән тәүге этабында 300-гә яҡын уҡыусы үҙ көстәрен һынаған, улар араһынан 27-һе генә икенсе турға үткән. "Һайлап алыу этабында Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының телдәре, мәҙәниәте, әҙәбиәте буйынса һорауҙарға яуап яҙҙыҡ. Ә бына Алтайҙа В.К. Плакас исемендәге республика гимназияһында ойошторолған икенсе этабында һәр ҡатнашыусы үҙенең милли рухи һәм матди байлыҡтарын сағылдырған проект эше яҙырға, ижади сығыш әҙерләп килергә тейеш ине һәм тағы ла бирелгән текстҡа анализ яһау талап ителде. Мин сығышымда Р.Ғариповтың "Туған тел" шиғырын һөйләп иштетерҙем һәм ҡумыҙҙа уйнаным. Ә инде проект эшемде гимназиябыҙҙа "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосына нигеҙләнгән этнопарк булдырыуға бағышланым. Һәр ҡатнашыусы үҙенең халҡы, мәҙәниәте тураһында һөйләне, барыбыҙ ҙа милли кейемдәрҙә инек. Тиҫтерҙәрем менән ихлас аралашып, уларҙың милли йолалары, уйынсыҡтары, ауыҙ-тел ижады тураһында бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәт белеп ҡайттым. Кейем үтелкәп торған арала алтай ҡыҙы менән туған телдәребеҙҙең оҡшашлығын һынап ҡарап, ҡыҙыҡлы әңгәмә лә ҡорҙоҡ хатта", - ти ярышта иң юғары баһаға лайыҡ булған Алтынай Атанғолова.

Баһалама ағзалары Алтынайҙың "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән проект эшен айырыуса юғары баһалаған. Уға был эшендә гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лилиә Әминева һәм рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зифа Исҡәндәрова ярҙам иткән.

- Халҡыбыҙ өсөн йәшәйеш кодексы булып торған "Урал батыр" эпосына бағышланған бик күп эштәр атҡарыла беҙҙең гимназияла. Уҡыусылар даими күреп-белеп, танышып торһон өсөн стеналарҙа уға арналған һүрәттәр элеп ҡуйылған, панно бар, ЮНЕСКО бүлмәһендә эпостан өҙөктәр яҙып ҡуйылған һәм Алтынай проект эшен бағышлаған этнопарктың макеты урынлаштырылған. Белем усағы территорияһында башҡорт халҡының эпосы геройҙарын һынландырған скульптуралар ҡуйылған бер этнопарк булдырыу - беҙҙең күптәнге хыялыбыҙ. Әгәр ҙә уны бойомға ашыра алһаҡ, бөтә республиканан килгән балаларға экскурсиялар, "Урал батыр" буйынса төрлө тематик саралар, ярыштар ойошторорға булыр ине. Гимназистар үҙҙәре лә был идеяны бик хуплай, олимпиадаға проект эше тәҡдим итеү талабын белгәс тә Алтынай үҙе үк ошо теманы тәҡдим итте. Коллегам Исҡәндәрова Зифа Зыя ҡыҙы менән уға йүнәлеш биреп, әҙерләнергә генә ярҙам иттек, ҡалғанын үҙе тырыштырҙы. Киләсәктә финанс мәсьәләләр хәл ителеп, шундай мәртәбәле һәм үҙенсәлекле олимпиадала еңеү яулап ҡайтҡан проектты тормошҡа ашырып булырына өмөтөбөҙ бар, - ти башҡорт теле уҡытыусыһы Лилиә Әминева.

Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының туған телдәре буйынса төбәк-ара олимпиада күп милләтле Рәсәйҙең төрлөлөгөн, һәр халыҡ вәкиленең үҙ туған теленә һәм мәҙәниәтенә һөйөүен, шул уҡ ваҡытта башҡаларға ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәтен сағылдырған ярыштарҙың береһе. Уның йәш быуындың белемен һынау ғына түгел, ә тәрбиәүи йәһәттән дә әһәмиәтле булыуын билдәләй Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназияһының рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зифа Исҡәндәрова. "Уҡыусыларға рус теле һәм әҙәбиәте буйынса ғына түгел, "Донъя мәҙәниәте"нән дә белем бирәм. Шуға донъя халыҡтарының, шул иҫәптән үҙебеҙҙең башҡорт халҡының мәҙәниәттәрен өйрәнәбеҙ. Был олимпиадала Алтынайға бына шул белемдәрен күрһәтеү талап ителде лә инде. Ғөмүмән, гимназиябыҙ уҡыусылары телдәр һәм мәҙәниәттәр буйынса үткәрелгән төрлө ярыштарға йыш йөрөй. Мәскәү, Санкт-Петербург, Саранск ҡалаларында үткән төрлө фәнни-ғәмәли конференциялар, Өфө фән һәм технологиялар университетындағы тәржемәселәр ярыштарында тик теләп ҡатнашалар", - ти Зифа Зыя ҡыҙы.

Әйткәндәй, Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының туған телдәре буйынса төбәк-ара олимпиадала 2-се Республика полилингваль күп профилле гимназия уҡыусылары Лиана Ҡарабаева менән Гөлназ Ғирфанова ла һынатмаған: ҡыҙҙар "Тикшеренеү эшенең яңылығы һәм көнүҙәклеге өсөн" һәм "Тәбиғәт ҡомартҡылары һәм мәҙәни мираҫ" номинацияларында билдәләнгән. Был иһә, республикабыҙҙағы белем усаҡтарында алып барылған эшмәкәрлектең генә түгел, ғаиләләрҙәге туған телгә һәм мәҙәниәткә булған мөнәсәбәттәрҙең дә асыҡ күрһәткесе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡыусыларын ҙур еңеүҙәргә дәртләндергән уҡытыусылар менән әңгәмә барышында башҡорт телен туған һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙең әһәмиәте, уҡыусыларҙың рус теле һәм башҡа сит телдәрҙе белеү кимәле тураһында ла фекер ҡорғайныҡ. Зифа Исҡәндәрова әйтеүенсә, үҫмерҙәр русса тәтелдәп тороуына ҡарамаҫтан, телмәрҙәре саф түгел: сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе, жаргондарҙы күп ҡулланалар. Шулай ҙа ике һәм унан күберәк телдәр белгәндәрҙең аҡыл кеүәһе юғарыраҡ була. Был ғына ла түгел, Башҡортостан кеүек күп милләтле республикала йәшәгән һәм балалар менән эш иткән белгестәргә "әсәй", "атай" кеүек иң мөһим һүҙҙәрҙе яттан белеү мотлаҡ. Был турала Лилиә Әминева: "Йөрәгенә операция яһатҡан 3 йәшлек бала уянғас та: "Инәйем ҡайҙа?" - тип һораған, шәфҡәт туташтары аңламаған. Һуңынан быныһ өсөн ғәфү үтенеп, былдай һүҙҙәрҙе махсус ятлап алыуҙарын әйткән табиптар", - тип, йөрәк әрнеткес осраҡ хаҡында ла телгә алды. Бына ни өсөн кәрәк беҙгә Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен мәктәптәрҙә дәүләт һәм туған тел булараҡ уҡытыу. Был осрашыу тағы бер тапҡыр ябай ғына хәҡиҡәтте раҫ ҡылды: балалар туған телдәрен һәм башҡа телдәрҙе белергә тейеш.**

**Сәриә ҒӘЛИЕВА.**

ШАҢДАУ

# "ДӨРӨҪ ЯҘАЙЫҠ!"

**"Киске Өфө"лә Сәйфулла Әмировтың "Дөрөҫ яҙайыҡ!" тигән мәҡәләһе баҫылғайны. Ҡыҙыҡ инде ул был тема. Әллә гәзит хәбәрселәренән яуаплылыҡ төштөмө икән ошо дөрөҫ яҙыу буйынса, тип тә уйланыла. Республика гәзиттәрендә лә бар ер-һыу атамаларын, кешеләрҙең исем-фамилияларын хаталы яҙыуҙар. Мин үҙебеҙҙең район гәзитенән миҫалдар килтерәйем әле.**

Былтыр беҙҙең ауыл егетенә "Салауат Юлаев" ордены тапшырҙылар. Район гәзите Таһиров Алмас Талха улы тип, уның тураһында яҙып сыҡты. Ә уның атаһының исеме Әбделхәй. Халыҡ көлә лә, көйә лә, шылтыратып та әйтеп ҡараныҡ, хата төҙәтеү ҙә, ғәфү үтенеү ҙә юҡ. Яңыраҡ "Ветерандарға шәхси парад" тигән мәҡәләлә һуғыш ветеранының исем-шәрифен башта Мәхмүт Ишколов, мәҡәлә уртаһында Ишкол Хәмзә улы, икенсе битендә Ишкол апа Мәхмүтов тип яҙып ҡуйғандар. "Кинонын исем туйы" тигән мәҡәләлә Таштимер мәктәбе директоры Роза Сәғит ҡыҙы Йосопова һүҙ аҙағынараҡ Роза Сәғитова булып китте.

Ярай инде, килограмды центнер тип яҙыуҙарына күҙ йоморһоң, ә кешенең исемен, фамилияһын дөрөҫ итеп яҙып булмаймы икән? Кем яуаплы һуң быға? Әле мин үҙебеҙҙең ауыл тирәһендәге, үҙем белгән-таныған кешеләрҙе генә миҫал итеп килтерҙем, моғайын, үпкәләмәстәр, үҙҙәре барып, хаҡлыҡ юллап йөрөмәстәр, бигерәк әҙәпле-ипле кешеләр. Ә белмәгәндәр күпмелер әле.

"Ни эшләп гәзиткә яҙылмайһың?" тип һораһаң, ошоларҙы ла сәбәп итеп ҡуялар бит кешеләр. Гел генә хата яҙмайҙар, әлбиттә, шулай ҙа бының һыныҡҡа һылтау булыуын иҫәпкә алһын ине гәзит хәбәрселәре. Бигерәк тә кеше шәхесенә ҡағылған мәғлүмәттәрҙе тикшереү кәрәк.

**Ғәлимйән НӘЖМИТДИНОВ.**
**Әбйәлил районы Тупаҡ ауылы.**

✓ Иртәнге томан тарала биргәс, беҙҙең яугирҙар алдында немец танкылары һәм уларҙың пехотаһы пәйҙә була. Артиллеристар көслө ут аса, орудие расчеттары, тәүге минуттарҙа уҡ дошмандың дүрт танкыһын сафтан сығара.



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



### Дала зонаһы күскенселәре

Гундар дәүләте иртә синфи типта булып, уның иҡтисади нигеҙен күсмә һәм ярым күсмә малсылыҡ тәшкил итә. Император (шаньюй) нәҫелдән бирелгән һәм бер ни менән дә сикләнмәгән власҡа эйә була. Үҙ функцияларын ғәмәлгә ашырғанда ул үҙенең кәңәшселәренә таянған. Модэ хакимлыҡ иткән осорҙа гундарҙа ҡатмарлы дәүләт аппараты булыуы билдәле. Яһаҡ һәм һалым түләтеүҙе теүәл итеп ойоштороу маҡсатында халыҡ һанын иҫәпкә алыу эштәре башҡарыла; уларҙың үҙ яҙмаһы һәм аҡса әйләнеше барлыҡҡа килә.

Евразия далаларында баш һөйәген оҙонайтыу йолаһы Үҙәк Азияның төрки телле күсмә ҡәбиләләренең әүҙем йоғонтоһо һөҙөмтәһендә таралыу таба, күрәһең, был уларҙа ғәҙәти күренеш булған. Ошо хаҡта боронғо яҙма сығанаҡтарҙа Үҙәк Азия күскенселәренең баланың башын таҡтасыҡтар бәйләп ҡуйып оҙонайтыуҙары хаҡында мәғлүмәттәр бар. Оҙонсаға әйләнгән баш һөйәктәре һанының Көньяҡ Урал, Ҡаҙағстан, Себер һәм Волга буйы халыҡтары ҡурғандарында V-X быуаттарҙа айырыуса ныҡ артыуын билдәләп үтергә кәрәк, бында ошо осорҙа төрки телле ҡәбиләләр өҫтөнлөк итә.

Б.э. II - I быуаттарында Көньяҡ Урал гундары хаҡында тик туранан-тура булмаған мәғлүмәттәр буйынса фекер йөрөтөп булһа, б.э. II быуатында уҡ улар тураһында яҙма сығанаҡтарҙа иҫкә алына.

Мәҫәлән, б.э. I быуатында йәшәгән Рим тарихсыһы Дионисий Урал һәм Төньяҡ Каспий арауығында йәшәгән гундарҙы белгән. Шундай уҡ мәғлүмәтте II быуаттың билдәле Рим тарихсыһы Клавдий Птолемей раҫлай: ул йәшәгән дәүерҙә гундарҙың алдынғы отрядтары үҙҙәренең көнбайышҡа табан хәрәкәтендә Төньяҡ Ҡара диңгеҙ райондарына барып етә.

Байтаҡ ҡына тарихсылар фекеренсә, гундар, сәйәси яҡтан әүҙем булһалар ҙа, Ҡаҙағстандың, Көньяҡ Себерҙең һәм Көньяҡ Уралдың сак-усунь мөхитендә аҙсылыҡты тәшкил итә, һәм бында ваҡыт үтеү менән урындағы малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләр өҫтөнлөк ала. Гундарҙың (юэчжей төркөмө) һәм ерле сак-усунь ҡәбиләләренең б.э. тиклем II быуатта Урта Азия аша Бактрияға яһаған берлектәге походы уларҙың билдәле берҙәм акцияһы итеп күҙаллана, һөҙөмтәлә унда урындағы халыҡ күсмә ҡәбиләләр хакимлығына буйһондорола. Б.э. тиклем I - б.э. I быуаттарында хакимлыҡ иткән Бактрия батшаларының күптән түгел табылған хазиналары, уларҙың үҫешкән ҡала мәҙәниәте булған үтә ҙур илдә сәйәси власҡа килгән хәлдә лә, элекке күскенселәр булараҡ, үҙҙәренең ата-бабаларының ғөрөф-ғәҙәттәрен, донъяға ҡараштарын онотмағанлығын күрһәтә. Был үлгәндәрҙе меңәрләгән алтын предметтарҙан (баш, өҫ, аяҡ кейемдәренең биҙәүестәре һ.б.) торған үтә бай ҡәбер инвентары менән күскенселәрсә ерләү йолаһынан күренә, ошо әйберҙәрҙең байтаҡ ҡына өлөшөндә уҙған быуаттарҙағы Евразия далалары күскенселәре сәнғәтенә хас булған һыҙаттар һаҡланып ҡалған. Үҙенсәлекле деталдәрҙең тағы береһе - Бактрияның батшалыҡ итеүсе династияһы вәкилдәре, б.э. тиклем V-IV быуаттарҙағы сактар кеүек үк, 6 -10 мең алтын предметтар менән биҙәлгән затлы кейем кейгән. Тикшеренеүселәр, билдәләп үтелгән мәҙәни параллелдәрҙе иҫәпкә алып, юэчжейҙарҙың Бактрияға походтарында сак-массагет этник мөхите вәкилдәренең әүҙем ҡатнашыуы хаҡындағы фекерҙе нигеҙле, тип ҡарай.

Гундарҙың йәмғиәте һәм дәүләттәре улар йәшәгән барса территорияларҙа (Үҙәк Азия, Алтай, Ҡаҙағстан, Көньяҡ Себер һәм Көнсығыш Европа) сығышы, йәшәү рәүеше, мәҙәниәте һәм теле төрлөсә булған ҡәбилә төркөмдәренән хасил булған, шуға күрә "гун" этнонимын әле билдәләп кителгән иҫкәрмәне иҫәпкә алып аңлау һәм ҡулланыу фарыз. Гундарҙың этник составы даими рәүештә үҙгәреп тора, быға уларҙың Ҡытай менән бер өҙлөкһөҙ һуғыш алып барыуы, шулай уҡ эске низағ-яуҙары булышлыҡ итә, ҙур этник төркөмдәрҙең массовый миграцияһына килтерә.

Көньяҡ Уралдың һәм уға йәнәш территорияларҙың боронғо тарихында гундарҙың мөһим роль уйнауын иҫәпкә алып, авторҙар уҡыусыны гундарҙың әүҙем ҡатнашлығында барлыҡҡа килгән һәм Көньяҡ Уралдың боронғо тарихында билдәле эҙ ҡалдырған бер нисә дәүләт берләшмәһенең ҡыҫҡаса тарихы менән таныштырыу урынлы булыр, тип һанай. Улар иҫәбенән Кангюй дәүләте айырым урын алып тора. Был дәүләт гундарҙың Ҡаҙағстан һәм Урта Азия далаларында, Урта һәм Түбәнге Һырдаръя, Төньяҡ Арал буйҙарындағы ерҙәрҙә алып барған сәйәси эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Гундарға буйһоноп йәшәгән, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе урындағы сак-усунь ҡәбиләләре ошо дәүләттең төп халҡын тәшкил итә. Сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Кангюй тәхетен йыш ҡына йә гун, йә Ҡытай ориентацияһын үҙ иткән хакимдар биләй. Ныҡлы стеналар менән уратып алынған тиҫтәләгән эре һәм йөҙәрләгән вағыраҡ ҡәлғәләр төҙөлөүе ошо замандағы Кангюйҙың иҡтисади һәм сәйәси ҡеүәтен раҫлаусы дәлил. Ошо ваҡыттан алып Көньяҡ Урал төбәге ҡәбиләләренең Урта Азия халыҡтары менән этномәҙәни һәм сауҙа бәйләнештәрен Кангюй үҙ контролендә тота башлай.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

Дошман пехотаһы 14 танкыһы менән 58-се полкҡа ябырыла. Әммә беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҙа уларҙы аяуһыҙ ут менән ҡаршы алырға әҙер була. Полк батареялары, шулай уҡ полкҡа ярҙамға беркетелгән 148-се артиллерия-миномет полкының гв. капитаны Г.Н. Шелабутин командалығындағы батареяһы уңайлы ут позицияларын биләй.

Иртәнге томан тарала биргәс, беҙҙең яугирҙар алдында немец танкылары һәм уларҙың пехотаһы пәйҙә була. Артиллеристар көслө ут аса, орудие расчеттары, мәргән атып, тәүге минуттарҙа уҡ дошмандың дүрт танкыһын сафтан сығара. Әммә дошман танкылары ла беҙҙең артиллеристарға көслө ут аса, капитан Георгий Шелабутин ошо алышта һәләк була. Шулай ҙа Күсимов полкы яугирҙары дошман атакаһын кире ҡаға, бик күп немец һалдаттары яу ҡырында ятып ҡала. Шуныһы үкенесле, Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән үк дошман менән батырҙарса алышҡан Георгий Шелабутин, корпус командованиеһы тарафынан Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителһә лә, Белоруссия фронтының артиллерия командующийы уны Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән генә бүләкләү менән сикләнә. Шулай инде ул, тылда, штабтарҙа ғына ултырып, ҙур хәрби вазифалар биләгән генералдар ут эсендә ватаны өсөн йәнен дә йәлләмәгәндәрҙең ҡаһарманлығына һәр бер осраҡта ла тейешле баһа бирә алмаған.

Алдараҡ бәйән ителгәнсә, Брянск фронтындағы батырлыҡтары өсөн 112-се Башҡорт атлы дивизияһы офицерҙары һәм һалдаттары Советтар Союзының орден-миҙалдарына лайыҡ була. Тик ошо батырҙарҙың командиры, ул саҡта полковник званиеһында булған Миңлеғәли Шайморатов ҡына наградаһыҙ ҡала. Ә бит башҡорт яугирҙарының даны был саҡта бөтөн илгә билдәле була. Бында корпус һәм армия командованиеһын ғәйепләп булмай - улар данлы комдивты Ленин ордены менән бүләкләү өсөн Мәскәүгә документтар ебәргән була. Әммә юғарыла, Ҡыҙыл Армия генштабында ултырған "тыл ҡомаҡтары"ның береһе, комдив М.М.Шайморатовты юғары наградаға тәҡдим итеү ҡағыҙындағы "орден Ленина" тигән һүҙҙе зәңгәр ҡара менән һыҙып, өҫтөнә "орден Красной звезды", тип яҙып ҡуя. Быны хәҙер күренекле башҡорт командирын күрәләтә кәмһетеү, тип кенә аңлатып була. Хатта ошо "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены ла инде гвардия генерал-майоры званиеһын алған Миңлеғәли Шайморатовҡа тапшырылмай - наградлау документтарына 1943 йылдың 14 февралендә генә, беҙҙең Башҡорт дивизияһы Донбастағы рейдта үлемесле алыштар алып барғанда, генералыбыҙҙың трагик үлеменә бер нисә көн ҡалғас ҡына ҡул ҡуйыла. Әммә батырҙар үлһә лә, дандары йәшәй. Башҡорт йәмәғәтселеге лә, республикабыҙ властары ла М.М.Шайморатовҡа, үҙе үлгәндән һуң булһа ла, Герой исемен биреүҙе һорай. Тик оҙаҡ йылдар дауамында юғары дәрәжәләр биләгән шундай уҡ штабсы хәрбиҙәр, йәнәһе, М.М. Шайморатов тере сағында тейешле наградаларын алған, хәҙер инде ул ваҡыттағы батырлыҡтары өсөн ҡайтанан наградлау законға тап килмәй, тип кенә яуап бирә торҙо. Аллаһыбыҙға шөкөр, тарихи ғәҙеллек ғәмәлгә ашты - Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа, уның яу ҡырында ҡаһармандарса һәләк булыуынан бирле 77 йыл уҙғас, Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ

# ШӘҺИТ ХОҘАЙБИРҘИН ФОТОҺҮРӘТТӘРЕ

**5 май Өфөлә төҙөкләндереүҙән һуң Ш.Ә. Хоҙайбирҙиндың йорт-музейы асыласаҡ. Музей бинаһына реконструкция эшләнде, ә экспозиция заманса дизайн алымдары һәм мультимедия технологиялар ҡулланып яңыртылды.**

Музей фондында Башҡортостандың партия һәм дәүләт эшмәкәре, журналист, яҙыусы, беренсе донъя һәм граждандар һуғышында ҡатнашыусы, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Шәһит Хоҙайбирҙиндың фоторәссемдәре һаҡлана.

Беренсе фотоһүрәттә - Шәһит Хоҙайбирҙиндың Рәсәй империяһы армияһында хеҙмәт иткән мәле, 18 йәшлек сағы. Фотоһүрәт 1914 йылда Волынск губернаһы биләмәһендә эшләнгән. Фото МШХ ОФ 361 номеры аҫтында һаҡлана.

Шәһит Хоҙайбирҙиндың Ҡыҙыл Йондоҙ ордены таҡҡан икенсе фотоһүрәте 1923 йылда эшләнгән. Фото МШХ ОФ 385 иҫәп һаны аҫтында теркәлгән.

Ике фотоһүрәт тә Рәсәйҙең Музей фонды Дәүләт каталогына индерелгән.





# ҺИНЕҢ МЕНӘН

## үҙеңдә эшең

**Таныш булығыҙ: Ишембайҙың аҫыл егете, заман башҡорто Ғиниәтуллин Илнур Марат улы - Ишембай йәмиғ (собор) мәсете имам-хатибы, уңышлы эшҡыуар, "Юрматы" мебель салоны етәксеһе, "Рыбаков ПлейСкул" (RYBAKOV PLAYSCHOOL) автономиялы коммерциялы булмаған өҫтәмә белем биреү үҙәге ойоштороусыһы һәм ... һәр эше менән бәйле әллә күпме идеялар, әллә күпме проекттар инициаторы. Геройымдың ваҡыты үтә лә тығыҙ: аҙнаһының һәр көнө, көнөнөң һәр сәғәт-минутына тиклем планлаштырылған, шуға ла уны оҙаҡ ҡына ваҡыт интервьюға күндерә алмай йөрөнөм. Сәбәп-маҡсаттарын аңлатып, ризалығын алғас та иркенләп аралашырға йайы сыҡманы. Бер осрашҡанда миңә ярты ғына сәғәт ваҡытын бүлә алды, икенсе осрашыуыбыҙҙа ла һөйләшеп-аралашырға мөмкинлек наҡыҫ булды. Йайын таптым шулай ҙа: йә клиенттары, йә "Рамаҙан тирмәһе"нә саҡырылған ҡунаҡтары менән аралашҡан мәлдәрендә уны ситтән генә күҙәтеп йөрөп, һөйләгәндәрен күңелемә теркәй барҙым. Уның тураһында тәүге уйым ошолай булды: "Тәүлектәге 24 сәғәткә нисек һыя икән?" Әңгәмәне уның ҡайһы йүнәлештәге эшмәкәрлегенән башларға белмәйерәк биргән: "Һеҙ күберәк дин әһелеме, әллә эшҡыуармы?" - тигән һорауыма ул: "Әйҙәгеҙ, баштан башлайыҡ", - тип, башҡаса һорау биргәнемде лә көтмәй, үҙе үк һөйләп алып китте.**

- Дин дә, эшҡыуарлыҡ та - атайым мәктәбе. Донъяны бәләкәйҙән атайыма эйәреп йөрөп, ул ҡаҙаҡ тотһа - ҡаҙаҡ, сүкеш тотһа - сүкеш тотоп, уның менән бергә намаҙ уҡып, мәсеткә йөрөп, вәғәҙәр тыңлап, ололарҙың әйткәндәрен ишетеп, тыңлап үҫтем. Ғәҙәттә, нимә аңыбыҙға, йөрәгебеҙгә һеңә, шул донъяға ҡарашыбыҙҙы формалаштыра. Минең менән дә шулай булды. Атайым ҡабул иткән донъя мине лә шәхес булараҡ әүәләне, аңымды формалаштырҙы. Әммә атайым миңә бер нәмәне лә көсләп, тыҡып таҡманы. Уның йәшәү принциптары, ул инанған тәғлимәт, атай менән улдың һөйөтемсә аралашыуы, көндәлек мәшәҡәттәр, эш, бая әйткәнемсә, йәйләп ҡына минең дә йәшәү рәүешемә әйләнде. 1996 йылдарҙа, ул ваҡытта миңә ете йәш ине, атайым тыуған ауылы Аҙнайҙа мәсет төҙөй башланы. Тотош ғаиләбеҙ менән мәсет һалыуҙы изге, сауаплы эш итеп ҡабул иттек, һәр яҡлап ярҙам иттек. Ошо осорҙа малайлығыма барып эштән ҡасып, йә булмаһа, ниндәйҙер шуҡлыҡтар ҡылып йөрөгәнемде хәтерләмәйем. "Атай мәсет һала" тигән уй, "Атайға ярҙам итергә кәрәк" тигән теләк хәтерҙә. Уға ярҙам итә алыуым күңелгә ниндәйҙер бәхет тойғоһо булып һеңеп ҡалған. Ул тойғо миндә әле лә һаҡлана.

Үҫә төшкәс, 6-сы класта, Тәлғәт исемле класташым менән ураҙа тота башланыҡ, аңлы рәүештә намаҙға баҫтыҡ. 2002-2003 йылдарҙа йәйге каникулдарҙа "Ләлә-Тюльпан" мәсетенә барып уҡып та йөрөнөм. Һәр хәлдә, гимназияны тамамлағанда алдымда "Кем булырға?", "Ниндәй һөнәр һайларға?" тигән һорау торманы ла хатта, унынсы класта уҡығанда уҡ дини йүнәлеш буйынса уҡырға тигән ҡәтғи ҡарар ҡабул иткәйнем. Мәктәпте тамамлағас, Ҡаһирә ҡалаһындағы "Әл-Әзһәр" Халыҡ-ара ислам университетын һайланым һәм август аҙағын да көтмәй, уҡыу башланғансы ғәрәп телен өйрәнә торайым, тип, июль башында уҡ Мысырға юл тоттом. Атайым шунда уҡ фатихаһын бирҙе, әсәйемде атайым менән икәүләп күндерҙек. Тик университетты тамамларға тура килмәне, Мысырҙа сыуалыштар башланғас, һуңғы курста ҡайтып китергә мәжбүр булдыҡ.

Ә эшҡыуарлыҡҡа килгәндә, ул да атайҙың йәшәү рәүеше, тормош тәжрибәһе аша аңыма һеңгәндер. Ул тәүҙә ағас сығарыу, таҡта ярҙырыу менән шөғөлләнде, һуңынаныраҡ дивандар эшләп һата башланы. Ярҙамлашам тип, ҡаҙаҡ-сүкеш, шөрөп, дрель тотоп, уның артынан йөрөй торғайным. Атайым миңә ышанып, берәй яуаплы эш ҡушһа, уға ярҙамлашыу ҙа, ҡулымдың ниндәйҙер эш белеүенән шатланыуым да үҙемә ныҡ оҡшай ине. Алтынсы кластарҙа уҡығанда "Мин дә атайым һымаҡ эшҡыуар булырмын", тигән уй яралғайны инде миндә, шуға күрә, ҡасан да булһа эшҡыуарлыҡҡа тотонормдо белеп йәшәнем. "Һеҙ күберәк дин әһелеме, әллә эшҡыуармы?" тигән һорауығыҙға әле һөйләгәндәремде йомғаҡлап: "Мин диндә йәшәйем, дин менән йәшәйем, ә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәм, дин - йәшәү рәүешем, эшҡыуарлыҡ - үҙемдә асыу, камиллаштырыу, хыялдарымды тормошҡа ашырыу өсөн сәбәп ҡылыу", - тип әйтә алам.

**Йәш кенә көйө имам-хатип булып эш башлағанда яуаплылыҡтан ҡурҡманығыҙмы? Икенсе йыл рәттән ишембайҙарҙы Рамаҙан тирмәләрендә ифтарҙар үткәреп шатландыраһығыҙ. Мәсетебеҙ ҙә күҙгә күренеп үҙгәрә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында был өлкәлә лә әллә күпме эштәр башҡарып өлгөрҙөгөҙ. Башҡарған эштәрегеҙҙе барлап үтәйек, тағы ниндәй уй-хыялдарығыҙ бар?**

- Күңелем менән тойоп, аңым менән аңлап ҡабул иткән эш, бая әйткәнемсә, йәшәү рәүешем - шуға яуаплылыҡтан ҡурҡыу тигән нәмә булманы. Яуаплылыҡты аңлауым, бәлки, шул эшкә тотонорға сәбәп булғандыр ҙа әле: Аллаһы Тәғәлә алдындағы яуаплылыҡ, был тәңгәлдә алған белемем, халҡым, балаларым, киләсәк алдындағы яуаплылыҡ - уларҙың һәр береһен тәрән аңлайым, шуға ла тәүәккәлләнем был эшкә. Бәләкәйҙән мәсеткә йөрөгәс, мәсет эшен нисегерәк итеп көйләп ебәреү мөмкинлектәре һөйләгән һүҙең, эшләгән эшең өсөн яуаплылыҡ менән бергә аҫҡы аң кимәлендә яралғандыр ҙа, бәлки. Мәле еткәс, ҡайһы саҡ эске тауышыңды тыңлай белеү ҙә ярҙамға килә. Атай-әсәйем, яҡындарым, дуҫтарым, класташтарым йөҙөндә ҙур ярҙамсыларым - командам бар. Һәр эште кәңәшләшеп, уртаҡ фекергә килеп башҡарабыҙ. Бер идея менән янған кешеләрҙең бергә тупланыуы үҙе үк ҙур көс.

Диндә ихлас булған кешеләр менән берлектә Илшат хәҙрәт Хафизов иҫән ваҡытта уҡ уның етәкселегендә байтаҡ эштәр башлап өлгөргәйнек. Әле башлыса шул эштәрҙе дауам итәбеҙ. Аллаға шөкөр, мәсеткә ремонт эшләп бөттөк. Элек мәсеттең беренсе ҡаты - идаралыҡ эштәре, икенсе ҡаты, шаршау менән генә икегә бүленеп, бер өлөшө - ирҙәр, икенсе өлөшө ҡатын-ҡыҙҙарға намаҙ уҡыу өсөн тәғәйенләнгән булһа, хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар - беренсе ҡатта, ирҙәр икенсе ҡатта намаҙ уҡый. Мәсет үҙ тәғәйенләнешенә ярашлы Аллаһ йорто булып ҡалды, идаралыҡ эштәрен буш торған үҫмерҙәр клубын ҡуртымға алып, шул бинаға күсерҙек. Мөхтәсибәт ағзаларының кәңәшмәләре, һәр дүшәмбе һайын имамдарҙың йыйылыштары ошо бинала үтә. Мөхтәсибәт башҡа ваҡыттарҙа ла буш тормай: Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡырға өйрәнеү, ғәрәп телен, хәҙистәр, бәйғәмбәрҙәр тарихын, Ислам дине ҡанундарын өйрәнеү буйынса даими курстар ойошторола. Быйылғы уҡыу йылынан балалар өсөн йәкшәмбе мәктәбе, "Хәлилә", "Сәлимә" ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары эшләй башланы. Улар өсөн төрлө осрашыуҙар, төрлө саралар үткәрелеп тора. Яныраҡ ҡына бер нисә район ҡатын-ҡыҙҙарының дини ойошмаларын саҡырып, хәҙистәр темаһына "Алтын тирмә" форматында уйын ойошторҙоҡ. Беренселекте иглиндар алды, ишембайҙар икенсе урынға сыҡты.

Рамаҙан тирмәләренә килгәндә, Ишембай өсөн ул яңылыҡ булһа ла, башҡа төбәктәрҙә ундай тәжрибә бар. Беҙ уны саҡ ҡына камиллаштырҙыҡ: ифтарҙарҙы билдәле бер тематика менән бәйләп үткәрә башланыҡ. Рамаҙан тирмәләре имамдар көнө менән башланып китте, артабан уҡытыусылар, шағир һәм яҙыусылар, табиптар, китапханасылар, йәштәр көндәре ойошторолдо. Афған, Чечен һуғыштары ветерандары, хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары айырым саҡырылды. Буйҙаҡтарҙы таныштырыу кисәһе лә үткәрҙек. Быйылғы Рамаҙан тирмәләренең тағы бер үҙенсәлеге шул булды: ифтарҙан һуң "Балалар" интернет проекты төшөргән "Рамаҙан" йәнһүрәтен ҡарауҙы ойошторҙоҡ.

**Бик һәйбәт, бик изге эш эшләгәнһегеҙ! Йәнһүрәт төшөрөү идеяһы ҡайҙан барлыҡҡа килде?**

- Башҡортса йәнһүрәт төшөрөргә теләү иң беренсе тел мәсьәләһе менән бәйле. Ғаиләбеҙҙә тик башҡортса ғына аралашабыҙ, мин үҫкәндә лә шулай булды, әле үҙемдең ғаиләмдә балаларға ҡуйған талап та шулай. Тик улар йотлоғоп ҡараған йәнһүрәттәр рус телендә, шул айҡанлы балаларҙың теле, фекерләүҙәре боҙола башланы. Башҡорт телендә йәнһүрәттәр булһа ине, тип һөйләшеп алғайныҡ ҡатыным менән. Бер көндә ул интернет селтәрендә башҡорт телендәге йәнһүрәттәр тураһында яҙма күреп ҡалған һәм Рамаҙан айы тураһында йәнһүрәт төшөрөргә кәрәк, тигән тәҡдим әйтте. Ул мәҡәләнең авторы минең класташым, "Балалар" интернет проекты етәксеһе Рүзилә Йәмилева булып сыҡты. Рүзилә менән килешеп-һөйләшкәндән һуң, ул ижади төркөм туплап эш башланы, мин йәнһүрәттең сығымдарын ҡаплауҙы Ишембай мөхтәсибәте өҫтөнә алдым. Тиҙ арала бағыусылар табып, иғәнә тупланыҡ, рамаҙан айы башланыуға йәнһүрәттең тәүге серияһы интернет селтәрендә сыҡты ла инде. Йәнһүрәттең әлегә ике серияһы төшөрөлдө, икенсе серияны "Ураҙа байрамы" тип атала. Артабан эш дауам итәсәк, бөтәһе 5-6 серия төшөрөү күҙ уңында тотола.

**Үҙегеҙ ҙә 6-сы класта уҡығанда ураҙа тота башланым, тинегеҙ. Ул йылдарҙа мәктәп уҡыусылары араһында дингә ылығыусылар юҡ тип әйтерлек ине. Һеҙҙең был аҙымығыҙҙы класташтарығыҙ нисек ҡабул итте?**

- Ураҙа тота башлауым класташтарым араһында көтөлмәгән яңылыҡ булманы, аңлап, хатта ниндәйҙер хөрмәт менән ҡабул иттеләр. Беҙҙең класс бик татыу ине, 6-сы класта уҡ аңлы, үҙаллы ҡарарҙар ҡабул итерлек коллектив булып формалашҡайныҡ инде, үҙебеҙҙең ҡарашыбыҙҙы бер-беребеҙгә лә, уҡытыусыларыбыҙға ла ҡурҡмай әйтә алырлыҡ, кәрәк булһа, бәхәсләшерлек, яҡларлыҡ кимәлдә инек. Биология уҡытыусыһы менән Дарвин тәғлимәте буйынса ул тәғлимәттең бары тик теория, фараз ғына икәнлеген үҙемсә иҫбат итеп бәхәсләшкәнем хәтеремдә.

**Гәзит уҡыусыларҙы ниндәй гимназияла уҡыуығыҙ менән дә таныштырып үтәйек. Ниндәй уҡыусы булдығыҙ?**

- Ишембай ҡалаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатында уҡыным һәм уны 2006 йылда тамамланым. Ул ваҡытта гимназия республика гимназияһы статусын йөрөтә ине әле. Уҡыу алдынғыһы булманым, әммә үҙемә кәрәк тип иҫәпләгән предметтарҙы уҡыу ғына түгел, ә бик теләп өйрәнә инем. Ниндәйҙер баһалар өсөн уҡыманым, баһалау системаһын бик үҙһенмәнем, әммә ҡаршы ла төшмәнем, ниндәй билдә ҡуйлар, шуны тыныс ҡына ҡабул итә инем. Бәләкәйерәк кластарҙа мәктәптәге шау-шыу, ҙур коллектив ниндәйҙер дискомфорт тыуҙырҙы. Ял көндәрендә ауылға, өләсәй эргәһенә ҡайтҡас, үҙемде тыныс, иркен мөхиттә тойоп кинәнеүем иҫемдә.

**Бер эштән дә ҡурҡмай, һәр нәмәне тәпейләп, үҙ ҡулығыҙ менән эшләп ҡарарға теләүегеҙҙең сере ауыл мәктәбе аша үтеүегеҙҙә лә түгелме?**

- Шулайҙыр. Шулайҙыр ғына ла түгел - тап шулай. Тәрбиә өсөн ауыл мәктәбе лә, өләсәй мәктәбе лә бик кәрәк. Атайым яғынан да, әсәйем яғынан да олатайҙарымды күреп өлгөрмәнем, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Атайым яғынан өләсәйемде лә саҡ ҡына иҫләп ҡалам. Ә әсәйемдең әсәһе Мәрйәм өләсәйем, ысынлап та, һәйбәт мәктәп булды: ҡаланан "эйәреп" ҡайтҡан ниндәйҙер ғәҙәт-ҡылыҡтарымды шәйләп ҡалдымы, тиҙ генә тейешле төҙәтмәләр индереп, дөрөҫ юлға күндерә һала торғайны. Сүкеш-ҡаҙаҡтан ҡурҡмаҫҡа бабайҙарым да, әрләгән ерендә - әрләп, маҡтаған ерендә маҡтап өйрәтте. Бәләкәйҙән ауылға ҡайтып инеү менән өләсәйҙең өйөнөң тирә-яғына "ревизия яһап", ҡағып-һуғып, йүнәтеп инеү ғәҙәтемә ингәйне инде. Ошондай тәрбиәләре өсөн мин өләсәйемә лә, бабайҙарыма ла рәхмәтлемен. Әле үҙем дә улымды (ҡыҙым бәләкәйерәк әле) өләсәйҙәре эргәһендә йыш ҡалдырам. Ул һигеҙ йәшлек сағында уҡ уның көсө етерҙәй бөтә инструменттарҙы алып биргәйнем, шуларҙың барыһын да тотонорға өйрәнде. Ҡалдыҡ-боҫтоҡ таҡталарҙан беҙ ҡайтыуға "яңы моделле" карауаттар, дивандар эшләп ултырта. Шөрөптәр еткереп булмай. Аллаға шөкөр, ҡулы эшкә өйрәнеп бара һәм был уға оҡшай.

Өләсәйем биргән һабаҡтарҙан бер ҡыҙыҡ хәл иҫкә төштө. Әхмәр ауылы ҡалаға яҡын ғы-

***✓ Һинең менән иҫәпләшһендәр өсөн ҡысҡырыу, талашыу мотлаҡ түгел - иғтибарға лайыҡлы эшең менән үҙеңде күрһәтеп була. Үҙеңде ниндәй өлкәлә аса алаһың, шул мәсьәләне өйрән һәм тәүәккәллә.***

# ИҪӘПЛӘШҺЕНДӘР ӨСӨН... менән күрһәт!

на. Өләсәйем һөт, ҡаймаҡ, эремсек һатырға баҙарға йөрөй торғайны. Мин дә уның менән барып, ихласлап һатышып ҡайта инем. Бер барғаныбыҙҙа юлыбыҙ ныҡ унды микән: "Был эш миңә оҡшап китте әле ул, мин ҙурайғас бизнесмен булам", - тип ҡанатланып ҡайттым. Ул саҡта миңә алты йәштәр самаһы ине.

**Бына һүҙебеҙ эшҡыуарлыҡ мәктәбенә лә барып ялғанды. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында "Юрматы" мебель салоны Ишембай, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында популярлыҡ яулап өлгөрҙө. Дивандар етештереүҙән башлағайнығыҙ, хәҙер салонығыҙҙа мебелдең ниндәйе генә юҡ, ассортиментығыҙ ҙа, салонығыҙҙың майҙаны ла киңәйҙе. Мебель баҙарында көнәркәшлек тә көслө. Конкуренцияға һәләтле булыу кимәленә еткәнсе ниндәй ҡаршылыҡтар, ниндәй тулҡындар аша үтергә тура килде?**

- Ҡаршылыҡтар булды, бар һәм буласаҡ, әлбиттә. Эшҡыуарлыҡҡа тотоноп китеү үҙе үк тормошта килеп тыуған ҡаршылыҡтарҙы еңергә, йырып сығырға теләүҙән башланды. Мысырҙан ҡайтҡас, иң тәүҙә, әлбиттә, үҙем белгән эшкә тотондом: Тирмән-Йылға мәсетендә имам-хатип ярҙамсыһы булып эшләп алдым. Бер йылдан Мысырҙа эстәгән белемемде киңерәк даирәләргә алып сығырға теләп, радиола "Иман" тапшырыуы алып бара башланым. Өфө шарттары яңы ғына ғаилә ҡороп, аяғына ла баҫып өлгөрмәгән кешене ергә тиҙ төшөрҙө. Йәшәргә торлаҡ юҡ, эш хаҡы ғаиләне ҡаралыҡ түгел. Етмәһә, ҡатынымды эшләтмәҫкә тип үҙемә һүҙ ҙә биргәнмен. Ишембайға ҡайтып, атайымдың кризис арҡаһында туҡтап ҡалған бизнесын тергеҙергә булдым. Атайымдың пилорамаһы, йөк машиналары бар ине, шул базала бер йыл ағас эше менән булдыҡ, 2012 йылда яңынан дивандар эшләргә тотондоҡ. Күңел биреп, көндө төнгә ялғап эшләнек. Тәүҙә Ишембайға яҡын ауылдарҙы хеҙмәтләндерҙек. Тора-бара, халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тырышып, ассортиментыбыҙҙы ла киңәйттек. Мебель һатып алырға теләүселәр менән тәүҙә дизайнерҙар эшләй, клиенттарҙың талаптары буйынса мебелдең үлсәмен, төҫөн иҫәпкә алып, заказдар ҡабул ителә. Юғары сифатлы тауарҙар менән эшләйбеҙ, хаҡтар ҙа артыҡ тешләшмәй. Беҙ етештергән мебелгә һорау бар, хәҙер инде күрше-тирәләге ҡалаларҙы ла хеҙмәтләндерәбеҙ. Өфө ҡалаһынан да заказдар бар. Үҙем таҡта йышыуҙан башлап, дивандарҙы көпләргә лә, тышлыҡтарын тегергә лә өйрәндем. Эш һорап килеүсегә тәүге дәресте лә, кәрәк икән, имтиханды ла тулыһынса үҙем үткәрә алам. Мебель етештереү фабрикалары менән ярыша алмайбыҙ, әммә урта бизнес кимәлендә аяғыбыҙҙа ныҡ баҫып торабыҙ, тип әйтә алам.



***Башҡортса йәнһүрәт төшөрөргә теләү иң беренсе тел мәсьәләһе менән бәйле. Ғаиләбеҙҙә тик башҡортса ғына аралашабыҙ, мин үҫкәндә лә шулай булды, әле үҙемдең ғаиләмдә балаларға ҡуйған талап та шулай. Тик улар йотлоғоп ҡараған йәнһүрәттәр рус телендә, шул айҡанлы балаларҙың теле, фекерләүҙәре боҙола башланы. Башҡорт телендә йәнһүрәттәр булһа ине, тип һөйләшеп алғайныҡ ҡатыным менән. Бер көндө ул интернет селтәрендә башҡорт телендәге йәнһүрәттәр тураһында яҙма күреп ҡалған һәм Рамаҙан айы тураһында йәнһүрәт төшөрөргә кәрәк, тигән тәҡдим әйтте.***

**Дивандар етештерергә тотоноуығыҙ аңлашыла - атай мәктәбе, ә шәхси мәктәп асып ебәреүегеҙ нимә менән бәйле һәм ни өсөн "Рыбаков ПлейСкул"?**

- Шәхси мәктәп Ишембай өсөн яңылыҡ түгел, әлбиттә, мәғариф тарихында бындай практика бар. Өҫтәмә белем биреүсе "Рыбаков ПлейСкул" балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәп - өҫтәмә белем биреү үҙәктәрен ойоштороу Рәсәйҙә 2015-2016 йылдарҙан алып Рәсәй миллиардеры Игорь Рыбаков башланғысында яйға һалына һәм йылдан-йыл популярлаша бара. Был мәктәптәрҙә тәрбиә биреү - совет психологы Лев Выготский, белем биреү Эльконин-Давыдовтың үҫтереүсе уҡытыу системаһы методикаһына нигеҙләнгән. Был методика баланы үҙенең киләсәген алдан күрергә, хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн маҡсаттар билдәләргә, тормошон планлаштырырға, килеп тыуған проблемаларҙы сисеү юлдарын эҙләргә, иркен фекер йөрөтөргә өйрәтә. Ошондай системаның мөмкинлектәре менән улым балалар баҡсаһына йөрөгән саҡта уҡ танышҡайным. Үҙемдең балалар менән эшләү тәжрибәм дә бар.

Мысырҙан ҡайтҡас, ярайһы ауыр ғына хәлдә ҡалып, ҡайҙа барып-һуғылырға белмәй йөрөгән ваҡытта ике йыл үҙем уҡып киткән гимназия-интернатта - ғәрәп теле, Башҡорт дәүләт университетының "Ислам дине һәм теология нигеҙҙәре" факультетында теология фәнен уҡыттым. Белгән-күргәндәремде ғәрәп илдәрендәге уҡытыу алымдары менән дә сағыштыра алам. Шуға күрә эшҡыуарлыҡта нығынып алып, мөмкинлек килеп сығыу менән уҡытыу ситемаһына үҙемдең ҡараштарым менән тура килгән алымдарҙы һайлап алып, шәхси мәктәп асырға ҡарар иттем. Шәхси мәктәптә кадрҙарҙы (тәү сиратта уҡытыусыларға) үҙ талаптарыңды аңлатып, һайлап алыу мөмкинлеге бар. Команда тупланды, эшләйбеҙ. Һәр хәлдә, балалар баҡсаһына йөрөгән кескәйҙәрҙең дә, башҡа мәктәптәрҙә уҡып, өҫтәмә белем биреү үҙәгенә йөрөгән уҡыусыларҙың да беҙҙән ҡайтҡылары килмәй. Мәктәптә тәрбиәләнеүселәр, уҡыусылар менән мөнәсәбәттә өй йылылығы, күңел йылылығы бар. Был - төп талап.

**Мәктәпкә нисә бала йөрөй һәм өҫтәмә белем биреүҙең ниндәй йүнәлештәре буйынса эшләйһегеҙ?**

- Әлеге көндә ике мәктәпкәсә йәштәге төркөм менән бергә һикһәндән артыҡ тәрбиәләнеүсебеҙ бар. Эш йүнәлештәребеҙ ҙә күп: буласаҡ беренсе кластарҙы - мәктәпкә, юғары класс уҡыусыларын Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләү, бөтә уҡыу предметтары буйынса ла өҫтәмә дәрестәр, логопед, психолог, дефектолог менән индивидуаль дәрестәр һәм төрлө йүнәлештәге түңәрәктәр: робототехника, инглиз теле, менталь арифметика, математика, уҡыу тиҙлеге, матур яҙыу (каллиграфия), рәсем, каратэ, көрәш. Икенсе уҡыу йылына башланғыс мәктәп (1-се һәм 2-се кластар) асыу планлаштырылған.

**Эшегеҙҙе рекламалау нисек ойошторолған?**

- Заманса, тип әйтһәм, хаталанмам, моғайын. Өс йүнәлеш буйынса ла "Бәйләнештә" һәм башҡа социаль селтәрҙәрҙә асыҡ төркөмдәребеҙ, ул төркөмдәрҙе алып барыу өсөн яуаплы кешеләр бар. Эшебеҙҙең сифаты - үҙе үк реклама.

**Ҡайһы саҡта берәй идеяны аҙналар, айҙар буйы күңелдә йөрөтөп, осона сығып булмай. Ә һеҙ бөтәһен дә еңел генә хәл итәһегеҙ кеүек? Барыһына ла нисек өлгөрәһегеҙ? Уңышығыҙҙың сере нимәлә?**

- Бәйғәмбәребеҙ үҙенең бер 9-10 йәшлек ир туғанына шундай һүҙҙәр әйтә: "Берәй нәмә кәрәк булһа, иң тәүҙә Аллаһы Тәғәләнән һора, бөтә кешелек һиңә файҙа килтерергә йыйылып та, әгәр уны Аллаһы Тәғәлә ҡушмаһа, һиңә бер нисек тә ярҙам итә алмаҫтар", - ти. Нимәнелер хәл иткәндә, кемдәндер ярҙам өмөт итеп, аңыңды, аҡылыңды сикләп ултырмаһаң, тәүәккәлләп, доғаларыңды ҡылып, эшкә тотонһаң, Аллаһы Тәғәлә ярҙам итә, һин сәбәп ҡылырлыҡ мөмкинлектәрҙе алдыңа үҙе килтереп сығара, тигән инаныу минең уйҙарымды һәр ваҡыт хәрәкәттә тотоусы көс. Йөҙ ынтылышыңдың туҡһан туғыҙы ғына тормошҡа ашырға ла мөмкин. Шулай икән, тимәк, нимәнелер үҙгәртергә, уйлау һәләтең менән дә, физик йәһәттән дә һығылмалыраҡ булырға кәрәк. Мәктәптә уҡыған йылдарымдан холҡомдағы бер нисә сифат үҙгәрешһеҙ ҡала килә шулай ҙа: ҡырылмаһа ҡырҡ эшең араһынан иң мөһимен һайлай белеү, көнөңдө, аҙнаңды, айыңды, бер нисә йылыңды алдан планлаштырыу. Пландарҙан ситкә тайпылған, тәүлектең 24 сәғәте эсенә һыймай бәргеләнеп-һуғылған саҡтарым да етерлек, шул саҡтарҙа ла алтын урталыҡты табып, сабырлыҡ һаҡларға күнегелгән. Эшемдең күп булыуы мине тағы бер нәмәгә өйрәтте: ниндәйҙер йөкләмәләрҙе ярҙамсыларға ышанып тапшыра белеү ҙә зарур, шунһыҙ мөмкин түгел.

**Уңышлы булыу өсөн милләттәштәребеҙгә нимә етмәй?**

- Башҡорттоң үтә ябай, үтә баҫалҡы булыуы сәбәпсе микән быға - башҡа милләттән булған таныштарым араһында "Башҡорт менән иҫәпләшмәҫкә мөмкин" тигән ҡараш йәшәй. Һинең менән иҫәпләшһендәр өсөн ҡысҡырыу, талашыу мотлаҡ түгел - иғтибарға лайыҡлы эшең менән үҙеңде күрһәтеп була. Үҙеңде ниндәй өлкәлә аса алаһың, шул мәсьәләне өйрән һәм тәүәккәллә. Тәүәккәллә һәм эшлә. Баҙап, юғалып ҡалмаҫ өсөн юридик яҡтан белемле булырға ла кәрәк. Оялсанлыҡ, кеше алдына сығып һүҙ һөйләй белмәү әле һаман милләттәштәремдең бәкәленә һуға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илнур Марат улы менән аралашыуҙан һуң күңелде йылылыҡ тойғоһо биләп алды. Ул һөйләгән һәр һүҙ иң дөрөҫ тәғлимәт итеп ҡабул ителде лә ҡуйҙы, донъяны унынса ҡабул итке, унынса аңлағы килде. Һаман да намаҙға баҫа алмай йөрөүем, урыҡ-һурыҡ ҡына тотолған ураҙаларым өсөн оят булып китте хатта. Үҙемде аҡлау өсөнмө, үҙем генә тойоп белгән эске инаныуҙанмы, уңайһыҙланып ҡына: "Намаҙ уҡыу менән ураҙа тотоу Аллаһҡа ҡайтыуҙың берҙән-бер юлымы?" - тип һораным. Уның яуабынан динебеҙҙе, беҙгә Күктән ебәрелгән тәғлимәтебеҙҙе, аңыбыҙҙы Йыһан менән бәйләгән Көстөң асылын белер-белмәҫ көйөбөҙгә фанилыҡтағы тормошобоҙҙо ни тиклем ҡатмарлаштырғаныбыҙҙы аңланым: "Аллаһҡа ҡайтыуҙың юлдары бик күп. Шуларҙың иң беренсеһе - фекерләү. Аллаһҡа яҡынайыу үҙеңдең асылың, был донъяға ниңә тыуыуың, яралмышың, тыуыу менән үлем, фанилыҡ һәм баҡыйлыҡ тураһында уйланыуҙарҙан башлана. Ошондай уйланыуҙарҙан һуң ғына: "Был донъяла башҡара торған ниндәй ғәмәлдәрем бар әле минең? Мине яралтҡан Көс алдында ниндәй бурыстарым бар?" - тип намаҙға һәм ураҙаға үҙеңдән-үҙең килеүең мөһим. Намаҙ уҡыу менән ураҙа тотоуҙан башҡа инаныуҙарың булмаһа, Ерҙә ҡылған бер ғәмәлең дә дөрөҫ түгел..."**

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА әңгәмәләште.**

***✓ Ямғыр күҙҙәре төшә башлағайны, атайым ос һәнәген алды. Ул оҙон һәнәк менән бесән сәнсеп ала ла, төбөн ергә ҡаҙап, һәнәкте турайтып баҫтыра, шунан уны күтәреп, яҫмарҙы кәбән башына ырғыта.***




Һуғыш бөтөп, ауылға һалдаттар ҡайта башлағас, әсәйем ниңәлер күңелһеҙләнде. Бығаса түҙем генә йөрөгән кеше көн дә иртәнсәк тороу менән:

- Ҡасан ғына ҡайтып инер атайығыҙ. Ҡайһы ере яраланғанды ла яҙмай бит, исмаһам. Аяҡ-ҡулы именме икән? Госпиталдә шул хәтлем оҙаҡ ятҡас, белмәйем инде... - тип көрһөнә. Кисен эштән ҡайтып инһә: - Үлә-бата йүгереп ҡайттым. Атайығыҙ үҙем юҡта ҡайтып төшөр ҙә, ҡаршылай алмай ҡалырмын кеүек, - ти.

Ятып киткәнгә тиклем тәҙрәнән күҙен алмай ул. Кискелеккә бешергән ашантынан бер өлөш һалып ҡалдыра. Атайым төнөн ҡайтып төшһә, ашарына әҙер булһын, тиҙер инде...

Ә атайым, алдан хәбәр-хәтер ҙә бирмәй, көтмәгәндә генә ҡайтты ла төштө. Июль баштары ине инде. Көн кискә ауышҡан мәл. Әсәйем ашъяулыҡ йәйеп, ашарға ултыртып йөрөй. Ул бөгөн һоло төйөп, шуның ярмаһынан өйрә бешергәйне. Әсәйем бөтә нәмәне ашъяулыҡҡа ҡуйып бөткәс, ғәҙәтенсә, тәҙрәгә күҙ һалды: атайым ҡайтып килмәйме, тиҙер инде. Һәм ҡапыл ҡатып ҡалды. Уның ҡиәфәте апайым менән мине лә тәҙрәгә ҡаратты. Урамдан үҙебеҙгә табан атлаған бер кешене күргәс, ул саҡта минең дә йөрәк ярыла яҙғайны. Кеше - һалдат кейемендә, башында - пилотка, ҡулында - таяҡ, һылтыҡлабыраҡ атлай. Беҙ өсөбөҙ ҙә, сихырланған шикелле, ҡайһылыр арала ошо кешегә ҡарап ҡаттыҡ. Шунан бөтәбеҙ бер юлы ишеккә ташландыҡ.

- Уф, балаҡайҙарым!.. - был өндәрҙе сығарғаны - әсәйем.

- Атайым бит, әсәй! - быныһын апайым ҡысҡыра.

- Атайым ҡайтып килә! Ордены бар! - мин шулай тип ишеккә атлыҡтым.

Сөнки урамдан килгән һалдаттың гимнастерка түшендә ниҙендер йылҡылдап күренгәнен абайлап ҡалғайным. Апайым менән беҙ атайыма ҡаршы йүгерҙек, әсәйем, ниңәлер, ары атларға хәле юҡ кешеләй, ҡапҡа бағанаһына һөйәлде...

Бына шулай ҡаршылағайныҡ беҙ атайымды. Ул ҡайтҡас, беҙҙең өй бермә-бер яҡтырып, уның эсендә ҡот артҡан һымаҡ булып китте. Атайымдың яраһы ла әллә ни түгел, минеңсә: аяғына снаряд ярсығы тейгән, хәҙер сатанлабыраҡ атлай. Миңә иһә уның шулай һылтыҡлабыраҡ, кәкре башлы таяҡ таянып, ҡабаланмай ғына атлап йөрөүе хатта оҡшай. Ут-һыуҙар кисеп ҡайтҡан һалдат тап бына шулай булырға тейеш тә!

Атайымдың түшендә икенсе яраһы - үлемесле яраһы ла булғанлығын мин ай самаһы үткәс кенә белдем.

Бесән өҫтө ине. Әсәйем хәҙер бесәнгә яңғыҙы йөрөмәй - атайым менән китәләр. Атайым бер көндө бесән сабып ҡайтты ла урынға ятып торҙо. Уның сырайҙары ағарып, күҙҙәре эскә батҡан һымаҡ булып киткәйне.

- Ҡабат йөрөмәҫһең бесәнгә. Быға тиклем эшләгәнде, бер һыйырлыҡ бесән үҙем дә әҙерләрмен әле, - тине уға әсәйем.

Атайымдың төнө буйы ыңғырашып, йоҡламай сығыуын мин дә һиҙеп яттым. Аяғы һыҙлаймы икән, тип уйлайым йоҡо аралаш, уны йәлләп. Атайым иһә иртәнсәк торҙо ла, әсәйем, йөрөмә, тиһә лә, тағы сабынлыҡҡа китте.

- Эш һағындырған, өйҙә ятып нисек түҙмәк кәрәк. Бөгөн сабырға түгел бит, бесән йыйырға, - тип, үҙ һүҙен бирмәне.

Тағы ике көндән атайым промартель председателенән ат һорап алып ҡайтты. Арбаға кәбән һәнәктәрен тейәп, үҙебеҙ ҙә теҙелешеп ултырып, кәбән ҡойорға киттек. Юлда әсәйемдең:

- Һин юҡ саҡтарҙа иң оло ҡайғы - кәбән ҡойоу була торғайны. Бөтә ауылға дүрт-биш кенә кәбән ҡойорҙай кеше ҡалғайны бит, Сәлмән, - тип һөйләнеп барғаны, атайымдың уны:

- Был һуғыш ғүмере онотмаҫ ыҙалар кисертте инде. Ярар, хәҙер ундай ҡайғың бөттө, Хәтирә, ҡабат күрергә генә яҙмаһын, - тип йыуатҡаны хәтерҙә.

Атайым ул көндө һис тә ҡабаланмай ғына йөрөп, кәбәнде төш ауыуҙарға ҡойоп бөттө. Шунан беҙ ләпәш ҡайын төбөнә ултырып сәй эстек. Ашап туйғас, атайымдың :

- Һай!.. Һуғышҡа тиклемге сәләмәтлектәремде ҡайҙан алайым! - тип ҡайын күләгәһенә ятып торғаны бөгөнгөләй күҙ алдында.

Көнбайыш яҡта өйкөм болоттар ҡарайып күренгәс, атайым ятҡан еренән йәһәт кенә торҙо ла:

- Ямғыр яуырға самалай, ҡайта һалайыҡ, - тип, ҡабаланып, ат егергә тотондо.

Тик беҙгә ыңғай ғына ҡайтып етергә тура килмәне. Ауылға саҡрым ярым самаһы ер ҡалғас, Ташморон аҫтындағы туғайға атайым атын туҡтатты.

- Күрәһеңме, Хәтирә? - тип әрәмә яғына ымланы атайым. - Ғөбәйҙә инәй шикелле бит?

Атайым күрһәткән яҡҡа мин дә ҡараным. Унда, әрәмә буйында, берәү, япа-яңғыҙы, кәбән ҡойоп маташа. Бесәнен күбәнән өҙә-йолҡа сәнсеп алған була ла ерекһән генә таған һөйәп ҡоя башлаған кәбәне өҫтөнә ырғыта. Бына ул һәнәгенең төбөн ергә ҡаҙап, юрмаслап үргә менергә маташа, ләкин ҡурап кипкән бесән, аяғын терәргә лә өлгөрмәҫ борон, шауҙырҙап аҫҡа ишелә. Күрәһең, ул кәбәне башына менеп, уны тапап төшөргә самалай. Ғөбәйҙә инәйҙе мин дә танып алғайным инде. Уның ире граждандар һуғышы мәлендә үк үлгән, ә ике улы был һуғышта ятып ҡалды: һуғыш йылдарында. Ғөбәйҙә инәйҙе, кәбәнде бер үҙе ҡоя икән, тип һөйләгәндәрен ишеткәнем дә бар ине...

- Былай үтеп китеү ирлек булмаҫ, Хәтирә, - тине лә атайым атының башын уңға тартты. - Ҡойошоп китәйек кәбәнен. Ямғыр яуып ебәрһә, этләнеп-гүрләнеп сапҡан бесәне әрәм булыр.

Килһәк, Ғөбәйҙә инәйҙең йән тиргә төшкән бите, муйыны, беләктәре бесән ҡауағына буялған, эскә батҡан күҙҙәре генә тоноҡ йылтырай.

- Бар, Хәтирә, кәбән башына мен, - тип атайым арбанан һәнәген алды ла, Ғөбәйҙә инәйгә ул-был хәбәр һөйләп тә тормай, кәбән ҡойорға тотондо.

Ул арала дөбөр-шатыр күк күкрәне, ҡайҙандыр ел күтәрелде. Оҙаҡламай ямғыр яуа башлаясағы көн кеүек асыҡ. Тик атайым болоттарға ла, күк күкрәгенә лә, Ғөбәйҙә инәйҙең:

- Һы, йә инде... Бына бит Хоҙайҙың рәхмәте. Ҡайҙан ғына килеп сыҡтығыҙ, - тип һөйләнеүенә лә иғтибар итмәй, бесәнде кәбән башына елгәрә генә.

Кәбән башында торған әсәйем:

- Сәлмән, ипләберәк! Аяғыңды йә түшенде ауырттырып ҡуйма! - тип хәүефләнеп ҡысҡыра.

- Ҡурҡма! Бер ни ҙә булмаҫ, тапа әйҙә. Хәҙер бөтәбеҙ, - тип, атайым тын алырға ла уйламай.

Ямғыр күҙҙәре төшә башлағайны, атайым ос һәнәген алды. Ул оҙон һәнәк менән бесән сәнсеп ала ла, төбөн ергә ҡаҙап, һәнәкте турайтып баҫтыра, шунан уны күтәреп, яҫмарҙы кәбән башына ырғыта. Бына кәбән осланып та бара инде. Өс-дүрт һәнәк бесән булһа, ул ҡар ҙа ятмаҫлыҡ хәлгә киләсәк.

Шул саҡ мин ғүмере онотолмаҫ хәлдең шаһиты булдым. Бесән ырғытырға тип күтәрә башлаған ос һәнәге атайымдың ҡулынан ысҡынып китте. Атайым, һәнәген тотоп ҡалырға теләгән төҫлө, уның өҫтөнә ауҙы. Әсәйем кәбән башынан:

- Ни булды, Сәлмән?! - тип ҡысҡыра.

Уңарсы атайым эргәһенә Ғөбәйҙә инәй килеп етте, ҡурҡып ҡысҡырып ебәрҙе:

- Хәтирә, төш әле, төшә һал!..

Ул саҡта мин әсәйемдең бейек кәбән башынан нисек төшкәнен дә хәтерләмәйем. Бер ҡулы менән һәнәге һабын, икенсеһе менән күкрәген тотоп ятҡан атайымдың ауыҙынан ҡыпҡыҙыл ҡан һарҡып сыҡҡанын күргәс, иҫемде юйғанмын...

Өлкәндәр аҙаҡтан, ныҡ көсәнеүҙән Сәлмәндең күкрәк яраһы эстән, асылған икән, тип һөйләнеләр. Нисек кенә булмаһын, беҙ күҙ менән ҡаш араһында атайһыҙ ҡалдыҡ. Уны беҙ Ташморон аҫтындағы туғайҙан ҡойоп яуған ямғыр аҫтында арбаға һалып алып ҡайттыҡ. Ошо хәлде хәтерләһәм, хәҙер үҙемдең дә шул ҡыл тартҡандай төҙ һаплы, дүрт йәпле һәнәкте ҡулыма алғым, уның менән ҡойоп ҡуйғандай итеп кәбән һалғым килеп китә. Тик быныһы әлегә хыял ғына шул. Бесән сәнсеп түгел, ос һәнәген былай күтәрергә лә саҡ-саҡ көсөм етә.

Һәр саҡ атайымды хәтерләткән ос һәнәген һорай ине Йәноҙаҡ бабай. Белеп ятам, әсәйем уға һәнәкте бер һүҙһеҙ бирер торасаҡ. Сөнки үҙебеҙгә лә кәбәнде һуғыш йылдарында гелән Йәноҙаҡ бабай ҡойоп бирә ине бит. Быйыл да әсәйем, моғайын, ошо йомош менән уға барыр.

- Киниәбай, тор әле, тор, ана бабайыңа өй башынан ос һәнәген төшөрөп бир, - тип әсәйем минең өҫтәге юрғанды асып уҡ ебәрә. Һикереп торам да, күҙемде ыуалай-ыуалай, соланға сығам һәм ҡыйыҡҡа тағылған арҡан буйлап өй башына үрмәләйем.

- Бесән йыя торған һәнәктәрҙе лә алып төш! - тип ҡысҡыра әсәйем ишек алдынан.

Бына ул төрлө оҙонлоҡтағы, төрлөсә йәпле һәнәктәр. Ос һәнәге улар араһында сабаҡ көтөүе араһында ятҡан суртан кеүек күренә.

Һәнәктәрҙе алып биреп, өйгә ингәс, мин әсәйемдең бөгөн ниңә иртә уятҡанын да аңланым.

- Улым, йәһәт кенә битеңде йыу ҙа ашарға ултырайыҡ. Бөгөн миңә иптәш булып сабынлыҡҡа һин барырһың. Апайың өйҙә ҡалыр, - тине әсәйем.

Бесән сабырға барғанда, сәй ҡайната торһаң да файҙа, тип ул быйыл апайымды үҙенә эйәртеп йөрөтә ине. Бөгөн мине алып бармаҡсы икән. Сәй эсергә ултырғас, әсәйем ниңә мине алып барырға булыуын асығыраҡ әйтеп бирҙе.

- Бесән кибеп етмәһә, бакуйҙы әйләндереп киптерербеҙ, тим. Һин, малай кеше, бакуй әйләндерергә ҡатыңҡыраҡ булырһың.

Әсәйемдең үҙемде апайымдан өҫтөнөрәк ҡуйыуы мине бер сиреккә үҫтереп ебәрә. Ҡабаланҡарһалан ашаным да, сығып, үҙемә иплерәк һәнәк һайларға тотондом.

* * *

Бына мин, һәнәк күтәреп, ғүмеремдә тәү тапҡыр бесән йыйырға китеп барам. Шулай әсәйемә ҡуш булып, эшкә китеп барғаныма һәр өйҙөң тәҙрәһенән һоҡланып ҡарайҙарҙыр кеүек. Әсәйемдең дә аҙымдары ышаныслы, сырайы бүтән саҡтағынан яҡтыраҡ тойола миңә.

Беҙҙең сабын Көнтөшмәҫ тигән ерҙә булыуын, ул яландың нисегерәк икәнен дә беләм. Былтыр атайым, һуғыштан ҡайтҡас, үҙебеҙгә кәбәнде шунда ҡойғайны. Шунан ҡайтып килгәнендә, Ғөбәйҙә әбейгә ярҙам итәм тип, үлде лә инде. Ауылдан ике саҡрым самаһы алыҫлыҡта ул. Өс яҡтан ҡуйы, шыйлан ҡарағай урманы уратып алған, түбән яғы Ҡыҙылташ ярындағы әрәмәлеккә барып тоташҡан. Ҡояш байтаҡ күтәрелмәйенсә нур төшмәгәнлектән, ул күп ваҡыт күләгә булып тора. Шуға Көнтөшмәҫ тип атағандарҙыр инде уны.

Бер урында юл ҡуйы ҡайынлыҡ аша үтә ине. Шунда эргәбеҙҙән генә бер өйөр ҡор балалары күтәрелеп осто бит. Ҡанаттары нығынмағанлыҡтан, улар алыҫ оса алмай, саҡ ҡына баралар ҙа тағы үлән араһына боҫалар. Сыҙаманым, киттем бит быларҙы ҡыуып. Әсәйем:

- Ҡыялма юҡҡа, әйҙә йәһәтерәк! - тип ҡысҡыра.

Мин һаман йүгерәм. Ләкин инде барып еттем тигәндә генә ҡор балалары күтәрелеп оса ла китәләр. Асыуым килеп, һәнәгем менән бәреп ебәргәйнем, ҡайын олонона барып бәрелде лә һәнәктең бер сатаһы шарт итеп һынып та сыҡты.

- Ай, тыңлауһыҙ! Юҡҡа ҡыялма тип әйттем мин һиңә! - Әсәйем, асыуланып, шулай һуҡрана, ә мин, һәнәгемдең һынған йәбен тоташтырырға теләгәндәй, уны урынына ҡуйып ҡарайым. Йә, сабынға барып етмәҫ элек һәнәк йәбен һындыр инде, эшкинмәгән. Берәү бесән йыйырға китеп бара имеш, тип үҙ-үҙемде әрләйем. Минең танау төшкәнен әсәйем дә абайланы, күрәһең, асыуланмай ғына әйтте:

- Ярар, аптырама, бакуй әйләндерергә ике йәбе лә етер. - Аҙыраҡ һүҙһеҙ барғас, өҫтәне: - Ҡош тотор саҡтарың алдараҡ шул әле, улым...

Сабынға еткәс, ашантыны бер ағас төбөнә ҡуйыу менән, әсәйем бакуйҙарҙың нисек кипкәнен ҡарарға тотондо. Яландың урта ерендәгеләре кипһә лә, уларҙың урман ситендәге башбаштарының аҫты шәмәреп, йәшел ята ине әле.

- Их, этләнеүем барҙыр ошо сабын менән, - тип йәне көйә әсәйемдең. - Бүтәндәрҙең бакуйы ҡурап кипкәндә лә, бында әйләндермәйенсә йыйып булмай. Улым, бына шулай итеп һәнәгеңдең йәбен ипләп кенә аҫҡа тыҡ та бакуйҙағы бесәнде туҙҙырмай ғына ҡояш яғына ҡаратып әйләндер. Ергә лыпын яҡҡырмай, бына шул рәүешле баҫтырыбыраҡ ҡуйһаң, ел ҡағып киптереүгә арыу булыр..

**(Дауамы бар).**

✓ *"Был сара белем кимәлен, һинең туған телеңде ниндәй камиллыкта белеүеңде һынауҙан бигерәк, ул һинең рухыңдың күрһәткесе. Ә ул йә бар, йә юҡ", - ти Тамара Танһыҡҡужина.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БЕЛЕМДЕ ТҮГЕЛ...

## рух кимәлен билдәләй



**Үткән аҙнала телэге һәм мөмкинлеге булған һәр кем "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант 2023" акцияһында офлайн һәм онлайн форматтарҙа ҡатнаша алды. Республиканың барлыҡ белем биреү һәм мәҙәниәт ойошмаларында, йәмәғәт ойошмалары офистарында диктант яҙырға мөмкин ине.**

Сара "Башҡортостан юлдаш телевидениеһы" телеканалының тура эфирында барҙы, һәр кем өйөндә генә ултырып та диктант яҙыуға ҡушыла алды. Телевидение аша төрлө төбәктә йәшәүсе милләттәштәребеҙ видеобәйләнешкә сыҡты. Ғөмүмән, һәр кем шаһит: был көндә республикабыҙҙың һәр ауылынан, һәр ҡалаһынан, шулай уҡ Мәскәүҙән, Ырымбур һәм Силәбе, Ханты-Манси өлкәләренән, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Беларусь республикаларынан, Испаниянан һәм башҡа төбәктәрҙә йәшәүсе башҡорттарҙан да социаль селтәрҙәр аша: "Беҙ ҙә диктант яҙабыҙ!" - тигән сәләм хәбәрҙәре килә торҙо. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты тәҡдиме менән 2015 йылда башланып киткән был акция 2019 йылдан халыҡ-ара кимәлгә сыҡты һәм хәҙер инде республика Башлығының ҡарарына нигеҙләнеп ойоштороло. Тәүге йылдарҙа бер нисә мең кеше диктант яҙып ҡараһа, хәҙер уларҙың һаны бер нисә йөҙ меңдән аша. Быйыл диктант яҙыу акцияһының Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көнө менән тура килеүе иһә уға тағы ла байрамса кәйеф өҫтәне.

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты базаһында ойошторолған майҙансыҡта диктант яҙған БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Тамара Танһыҡҡужина, мәҫәлән, былтыр телде яңы өйрәнеүсе булараҡ үҙен һынап ҡараһа, быйыл ул диктантты туған телендә иркен аралашыусылар рәтендә яҙған. "Көнкүрештә туған телебеҙҙә иркен аралашһаҡ та, диктант яҙырға ҡыймаусылар булыуы ла ихтимал. Әммә ҡурҡырға кәрәкмәй. Былтыр мин үҙемде һынап ҡарағандан һуң, быйыл тағы ла юғарыраҡ "тауҙы" яуларға булдым. Шикләнмәйем, быйыл да ниндәйҙер яңы һүҙҙәр, онотолған ҡағиҙәләр осраясаҡ, тик улар үҫешер өсөн этәргес кенә. Был сара белем кимәлен, һинең туған телеңде ниндәй камиллыкта белеүеңде һынауҙан бигерәк, ул һинең рухыңдың күрһәткесе. Ә ул йә бар, йә юҡ", - Тамара Танһыҡҡужинаның был һүҙҙәре "Диктант яҙам тигән булып үҙҙәрен күрһәтергә генә йөрөйҙәр" йәки "Диктант яҙып ҡына башҡорт телен күтәреп буламы?" тигәндәргә лә яуап булып яңғырай. Туған телебеҙ халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен, языусыларҙы, юғары вазифа биләүселәрҙе, йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, йәш быуынды бер урынға туплай ала икән, быға ҡыуанырға ғына кәрәк.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## әсә һөтө менән һеңдерҙем



**Үткән кесаҙна иртәндән үк бик етди сараға - башҡорт теленән диктант яҙырға йыйындым. Унан алда ғына Өфө ҡала округы хакимиәтендә рус теленән тоталь диктант яҙыуҙа ҡатнашҡайным. Ни өсөн үҙемдең икенсе туған телем булған башҡорт теленән дә яҙып ҡарамаҫҡа, тигән уй-ниәт менән дәртләнеп, үҙем белем алған уҡыу йортона - Өфө фән һәм технологиялар университетына юлландым.**

...Байрам ишектән ингәс тә башланды: музыка яңғырай, бөтөн ерҙә милли кейемдәге егет-ҡыҙҙар. "Ағай, әйҙә, мин Һеҙҙе оҙатып ҡуям, ул икенсе корпуста, физматта", - тип, береһе минең менән аудиторияға тиклем бара. Йәштәр теҙелгән тере коридорҙан үтәбеҙ, минең менән тиңләшкән һәр кем һаулыҡ һораша. Мин үҙем дә яуап бирәм һәм күптән, ярты быуат элек булған ваҡиға иҫемә төшә. Был хәлде әсәйемдәр гел көлөп иҫкә төшөрә торғайнылар. Ауылдан оло йәштәге инәйебеҙ ҡунаҡҡа килгән. Быға тиклем Өфөлә лә, башҡа ҡалала ла булмаған. Ә ауылда, билдәле, урамда барыһы менән дә - танышмы ул һинә, юҡмы, иҫәнләшәһең. Был инәй ҡала урамы буйлап йөрөп ҡайтҡан да, зарлана икән: "Бынау Ленин урамында шул тиклем халыҡ күп! Барыһы менән дә һаулыҡ һораша торғас - телем, башымды һелкә торғас башым арып китте. Күбеһе һаулыҡ һорашмай әле!" Өфөлә халыҡ тәрбиәһеҙ икән, тип ҡайтып киткән ҡунағыбыҙ.

Ҙур аудитория алдында ысын башҡорт байрамы - ҡурай яңғырай, милли кейемдәге апайҙар бейей, килгән ҡунаҡтарҙы ла үҙҙәре менән бейергә төшөрәләр. Мин йәһәт кенә аудиторияға инә һалам. Ә унда яйлап ҡына студенттар, республиканың арҙаҡлы ғалимдары, артистар, педагогтар йыйыла. Милли кейемдәге матур-матур өләсәйҙәр ултырған рәткә урынлашам. "Мине танымайһыңмы әллә? - тип һорай үпкәләберәк эргәмдә ултырған апай. - Мин әсәйеңдең яҡташы ла инде, һин уның менән бергә Ейәнсураға килгәйнең бит!" Бындай өндәшеүҙәргә өйрәнеп бөткәнмен мин. "Таныйым, әлбиттә. Нисек танымайым инде!" - тигән булам. Йөнле итеп һөйләшергә тотонабыҙ. Арттағы рәттә "Ашҡаҙар" радиоһының татыу хеҙмәткәрҙәре ултыра. Шул иҫәптән "Вечерняя Уфа" гәзите тураһында ла матур тапшырыуҙар эшләгән билдәле журналист Фәнүзә Баһауетдинованы күреп шатланам.

Бына беҙҙе бер ҡорға йыйған диктант башлана. Әммә унан алда ойоштороусылар диктанттың әүҙем ҡатнашыусыларына бүләктәр тапшыра. Улар араһында коллегаларым да күп. Ашҡаҙарҙар ҙа бүләкһеҙ ҡалманы. "Ҡалай күңелле күрҙеләр", - тип ҡыуана Фәнүзә Кинйәмырҙа бүләк алғас.

Быйыл башҡорт теленән диктант туғыҙынсы тапҡыр үткәрелә. Халыҡ-ара тигән статусы ла бар, күп кенә сит илдәрҙә лә башҡорт теленән диктант яҙалар. Уны һәр кем яҙа ала. "Тере" майҙансыҡтар - белем биреү, мәҙәниәт усаҡтары, вуздар, йәмәғәт ойошмалары залдарынан тыш, диктантты телевизор йәки компьютер алдында ғына ултырып, онлайн форматта ла яҙып була. Ойоштороусылар уны башлап өйрәнеүселәр, иркен аралашыусылар өсөн айырым яҙҙыра. Башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш диалектында ла диктант яҙҙылар. Был бик яҡшы, башҡорт теленең диалекттары күп бит. Телселәр кешенең һөйләшенә ҡарап, уның ҡайһы төбәктән икәнен әйтә ала. Мин уларҙы бик айырмаһам да, көньяҡ диалектта һөйләшкән кешене тиҙ танып ҡалам: "йығылды" тимәй, "коланы" тей икән, ул мотлаҡ Ейәнсуранан йә уға сиктәш районда. Башҡа диалекттарҙы ҡайһы бер һүҙҙәренә ҡарап айырам, мәҫәлән, илештәр "иш" тигән ымлыҡ өҫтәп ҡуя, ҡыйғылар "ҡый" ти...

...Азамат Тимеров башҡарыуындағы "Урал" йырын барыһы ла аяғүрә баҫып тыңлай. Бына барыһы ла етди төҫ алып, диктант яҙырға әҙерләнә. Етди, тиһәм дә, диктант яҙғанда ла байрамса кәйеф беҙҙе ташламай. Башҡорт телен башлап өйрәнеүселәр икенсе майҙансыҡҡа сығып киткәс (мин башҡорт телен яҡшы белгәндәр менән ҡалырға йөрьәт иттем), трибунаға "диктатор" сыҡты. Уның ролендә билдәле бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БДУ-ны 1978 йылда тамамлаусы Риф Ғәбитов сығыш яһай. Риф Фәтих улы залға ҡарап: "Балалар", - тип мөрәжәғәт иткәйне, халыҡ геү килеп, йәнләнеп китте. 60, 70 йәште үткән өлкән ағайҙар ҙа йор ғына бер-береһенә ҡараштты. Риф Ғәбитов юғалып ҡалманы: "Эйе, балалар. Һеҙ барығыҙ ҙа тыуған Башҡортостаныбыҙҙың балалары түгелме һуң?"- тип ҡабатланы.

Алғараҡ китеп, уның диктатор ролен дә уңышлы башҡарыуын әйтер инем. Әлбиттә, ул драма артисы түгел, шуға ла диктант уҡығандағы ҡайһы бер етешһеҙлектәргә иғтибар итмәҫкә лә булыр. Бейеүсе һөйкөмлөлөгө менән бар аудиторияның иғтибарын яуланы. Иң аҙаҡҡы һөйләмде уҡыр алдынан: "Минең ниндәй интонация менән уҡыуыма иғтибар итегеҙ һәм һөйләмдең аҙағында ниндәй билдә ҡуйырға икәнлеген аңларһығыҙ", - тине Риф Фәтих улы. Уҡып бөткәс иһә, бар зал ҡул сабып ебәрҙе.

Рус теленән тоталь диктанттағы текст яҙыусы Арсеньевтың нанай Дерсу Узала менән дуҫлығы тураһында ине һәм уны уҡығанда Себер тайғаһының еҫе сығып киткәндәй булғайны. Башҡорт теленән диктантта иһә Башҡортостандың дала елдәре битебеҙҙе һөйгән кеүек булды. Рус теленән диктант өсөн махсус текстар яҙылһа, башҡорт теленән диктантты ойоштороусылар классик әҫәрҙәрҙе һайлай. Был, минеңсә, бик дөрөҫ. Әле беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Рауил Бикбаевтың әҫәренән өҙөк яҙҙыҡ. Ә мин Рауил Төхвәт улы, ысын мәғәнәһендә халыҡ шағиры һәм ҡурҡыу белмәҫ гражданин менән яҡындан аралашып йәшәй алғаным менән бәхетле. Беҙҙең аранан иртә киткән улы Айҙар менән университетта бер төркөмдә уҡыныҡ һәм дуҫ булдыҡ. Әле шағир исемен йөрөткән парк янында йәшәйем. Парк буйлап йөрөгәндә уның нисек итеп редакцияға килеп инеүен, китаптарын бүләк итеүен һағынып хәтерләйем. Рауил Бикбаев ниндәйҙер көртәләргә һыймаған, тәүәккәл, сая ине. Мине һәр ваҡыт асылы менән бик ихлас, шул уҡ ваҡытта ҡыйыу ҙа кешеләр һоҡландыра. Уның әҫәрҙәре лә шулай. Бөгөн уҡылған өҙөк тә шундай ине. Уны хистәр бураны ҡуптармай уҡып буламы ни! Риф Ғәбитов өҙөктө уҡығанда тотош спектакль ҡуйғандай булды, туған телгә гимн булып яңғыраны ул!

Башҡорт теле буйынса яҙған тәүге диктанттың һөҙөмтәләре ниндәй һуң? Башлыса был осраҡта нөктә-өтөрҙәр, һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы тураһында һүҙ алып барһаҡ. Әммә мин матур һандарҙан башлағым килә: 2345. Тап ошо һандағы майҙансыҡта быйыл диктант яҙылған. Быға нисек ҡыуанмайһың! Әгәр ҙа 2015 йылда 3505 ҡатнашыусы булһа, былтыр улар 300 меңдән ашып киткән. Быйыл был рекордты ла үтеп киткәнбеҙҙер, моғайын.

Мин яҙмышыма шул тиклем рәхмәтлемен - башҡорт телен әсә һөтө менән һеңдерә алдым. Ике телдә лә иркен аралашам. Башҡорт теленең ни тиклем һутлы, бай икәнен беләм. Шиғырҙарҙы ла улар ижад иткән телдә уҡырға кәрәк. Шунда ғына телдең матурлығы, образлылығы, тәрәнлеге асыла. Мостай Кәримде русса-ға тәржемә иткән Елена Николаевская шәп белгес, әммә Мостай ағайҙы башҡортса уҡыһаң, бөтөнләй башҡа тойғолар кисерәһең. Авторҙың хистәрен, кисерештәрен тәржемәлә тулыһынса биреү мөмкин түгел шул.

Ошо урында тағы бер тарих иҫкә төшә. "Всадник на золотом коне" фильмын төшөргәндә Башҡорт академия драма театрының бер төркөм артистары ла ҡатнаша. Актер Ғайса Хәсәнов атҡа һикереп менеүе була, ат һыбайлыһын саптырып алып китә, уны бер кем дә туҡтата алмай. Артист бер нисә сәғәттән үҙе йәйәү ҡайтып килә лә, иҫе китеп һөйләй икән: "Бер ауыл "выжт" итеп ҡалды". Бер ауылды һә тигәнсе үткән инде, йәнәһе. Башҡорт телендәге ошо ябай ғына һөйләм дә бына нисек үҙенсә яңғырай!

Тел - ул бер нәмә менән дә үлсәп булмай торған байлыҡ. Беҙгә ошо телде биргән, уны яратырға өйрәткән атай-әсәйҙәргә, уҡытыусыларға рәхмәт әйтәйек.

**Вячеслав ГОЛОВ,**
**"Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АҒЫНМЫ, ҠАРАҺЫНМЫ?

■ Аҙна буйына етерлек итеп йоҡлап ҡуйырға буламы? Күптәр ялдарҙа оҙаҡ йоҡлауын, аҙна буйы йыйылған йоҡоно туйҙырам, тип аңлата гәҙиттә. Әммә бар нәмәлә лә, хатта йоҡола ла сама кәрәк, ти ғалимдар. Аҙ йоҡлаһаң да насар, тик бына артығын йоҡлау зыянлыраҡ - диабет, йөрәк сирҙәре йоҡосоларҙы "ярата". Белгестәр өлкән кешегә тәүлегенә 7-9 сәғәт йоҡо етә, тип раҫлай. Шунан кәмерәк йә артығыраҡ йоҡлайһығыҙ икән, хроник сирҙәр уяныуы ихтимал. Һимереү, диабет шулар рәтенә инә. Депрессия кисергән кешеләр ҙә күберәк йоҡлай икән. Был, үҙ сиратында, уны тағы ла тәрәнәйтеп ебәрә ала. Америка ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, 9-11 сәғәт йоҡлаусыларҙа йөрәк сирҙәре йышыраҡ барлыҡҡа килә.

■ Диетолог Елена Соломатина билдәләүенсә, аҡ шоколад сәләмәтлек өсөн иң зыянлыһы. Сөнки унда какао урынына какао майы ҡулланыла һәм уның ҡырҡыу еҫен баҫыр өсөн аҡ шоколадҡа күп итеп шәкәр, һөт һәм башҡа тәмләткестәр ҡушыла. Һөҙөмтәлә, калориялы продукт килеп сыға. Шуға ла шоколад ашағыҙ килһә, ҡараһын ашағыҙ. Бер плиткала 68 процент какао икән, ул сифатлы иҫәпләнә.

■ Диетолог, "Сәләмәт туҡланыу" ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры урынбаҫары Алексей Кабанов яҙ миҙгеләндә иң файҙалы ризыҡ булып айыу һуғаны (черемша) тора, тип белдерҙе. Уны төрлө яҡтарҙа төрлөсә атап йөрөтәләр: урман йыуаһы, һаҫыҡ йыуа һ.б. Йыл йылы килгәндә, апрелдә үк өлгөрә башлаған был үҫемлек С витаминына бай, унда бактерияларға ҡаршы көрәшеү сифатына эйә эфир майҙары, шулай уҡ В төркөмө витаминдары бар. Аппетитты көйләүҙә, ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген көйләп ебәреүҙә уға тиңдәр һирәк. Редистың тәүге уңышы ла организмға файҙалы буласаҡ. Яман шешкә ҡаршы көрәшеүсе матдәләргә бай, калорияһы ла күп түгел, ул идеаль диетик продукт иҫәпләнә. Аҙнаһына 2-3 тапҡыр редис ашағыҙ. Ирәүән дә яҙғы табындың витаминдарға байытып ебәрәсәк. Уның япрағы менән тамырында токсиндар күп, һабағы ашарға яраҡлы. Уның составындағы К витамины ҡан ойошоу процесында ҡатнаша, кальцийҙы үҙләштерергә ярҙам итә. К витамины һөйәк һәм тештәрҙең ныҡлығы өсөн кәрәк. Һабаҡҡа ҡыҙыл төҫ биреүсе антоциан иһә антиоксидант иҫәпләнә.

■ 2023-2024 йылдарҙа ҡояш әүҙемлеге күҙәтеләсәк, тип белдерә Рәсәй фәндәр академияһының Космик тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре, физика-математика фәндәре докторы Сергей Богачев. Ҡояш әүҙемлеге билдәле бер ритм буйынса күтәрелә һәм түбәнәйә, бер тулы цикл 11 йылды ала. 2023 йылдың аҙағы - 2024 йылдың башында көтөләсәк ҡояш әүҙемлеге һөҙөмтәһендә күп кенә магнит бурандары буласаҡ. Был иһә күптәрҙә сәләмәтлек менән бәйле проблемаларға килтерәсәк. Шулай ҙа ғалим әйтеүенсә, быған ҡурҡырға кәрәкмәй, бары тик һаулыҡҡа иғтибарлы булырға кәрәк. Тиреһе ҡояшҡа бирешеп барғандарға, шулай уҡ магнит бурандарын ауыр үткәргәндәргә һаҡланырға кәңәш ителә. Ҡояш әүҙемлегенең циклик артыуы аномалия түгел, ә норма, ти физик Богачев. Быға тиклем ҡояштағы ҡеүәтле сатҡылар һөҙөмтәһендә бер нисә төбәктә тоньяҡ балҡышы күҙәтелгәйне.

ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ

**Ошо көндәрҙә мәғариф ветераны, күңеле менән шағир, һөнәре буйынса математик, башҡорт милли мәғариф өлкәһендәге йәмәғәт эшмәкәре, Ишембай еренең тарихын тәрәндән өйрәнеүсе белгес-краевед, күп һанлы үткер публицистик мәҡәләләр авторы Фәүзиә Маннан ҡыҙы Аҡҡолова 90 йәшлек юбилейын билдәләне. Уҡытыусыларын тәбрикләр өсөн республиканың төрлө мөйөштәрендә йәшәгән уҡыусылары ла килгәйне. Тулҡынландырғыс булды осрашыу.**

# КҮҢЕЛЕ МЕНӘН ШАҒИР,

## һөнәре буйынса математик



Улар быуынын "һуғыш балалары" тип йөрөтәләр. 1941 йылда һуғышҡа киткән атаһынан бер йылдан ҡара ҡағыҙ килә. "Ауылдағы башланғыс мәктәпте тамамлаған 1943 йылдың яҙы тағы ла ауырыраҡ килде, хатта аслыҡтан шешенеп үлеүҙән саҡ ҡалдым... Артабан уҡыуҙы дауам итеү тураһында уйларға ла ярамай ине, 3-4 саҡрымдағы Маҡар мәктәбенә йөрөп уҡыу өсөн кейем дә, хәл дә юҡ", - тип хәтерләй һуғыш урлаған бала сағы тураһында Фәүзиә Маннан ҡыҙы. Берениһенән-береһе бәләкәйерәк биш бала менән яңғыҙы тороп ҡалған әсәһенә ни бары 35 кенә йәш була. Үҙе лә алты йәшенән етем ҡалып, уғай әсәй тәрбиәһендә үҫкән Гәлимә инәй тырыш, хәстәрлекле, егәрле, ярҙамсыл, талапсан, гәҙел кеше була. Балаларын да бәләкәйҙән эшкә күндәм, ауырлыҡҡа сыҙам булырға өйрәтә. Тормош ауырлығынан ҡотолоу юлын белемле кеше булыуҙа күреп, нисек кенә ауыр булһа ла, һуғыш бөткән йылда ҡыҙҙарын Маҡар мәктәбендә уҡыта башлай. 1951 йылда, мәктәпте тамамлағас, бөтә предметтарҙы саф башҡорт телендә уҡыған Фәүзиә Стәрлетамаҡ педагогия институтының физика-математика факультетына уҡырға инә. Уны уңышлы тамамлап, йүнәлтмә буйынса Әбйәлил районы Дәүләт ауылында математика уҡытыусыһы булып эш башлай.

Хеҙмәт биографияһының бер генә йылы ситтә үтә. 1954 йылда Ишембайға ҡайтып, тыуған ауылы Иҫәкәйҙә, күрше Маҡар урта мәктәбендә уҡыта. 1965 йылда, тормош иптәше Фәрүр Шәрифулла улы Зөлҡәрнәевты Ишембай районы халыҡ мәғарифы бүлеге етәксеһе итеп эшкә күсергәс, уларҙың ғаиләһе Ишембай ҡалаһына килеп төпләнә. Фәүзиә Маннан ҡыҙы хеҙергә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназия-интернатына, ул саҡтағы 2-се интернат-мәктәпкә уҡытыусы булып урынлаша. Ең һыҙғанып эшкә тотона, уны математика уҡытыусыларының методик берекмәһе етәксеһе итеп һайлап ҡуялар. Был эшкә уларҙын да йәлеп итеп, кабинет йыһаҙландырып ала. Ҡала мәктәптәре араһында өлгөлө тип билдәләнгән кабинетта ҡала һәм республика кимәлендә семинарҙар үтә. Уҡытыусылыҡ эшенән тыш, әллә күпме йәмәғәт эштәре өйәләр Фәүзиә Маннан ҡыҙы иңенә: мәктәптең партия ойошмаһы секретары, халыҡ контроле ойошмаһы етәксеһе була ул.

90-сы йылдар башында бер төркөм алдынғы ҡарашлы уҡытыусылар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре тырышлығы менән 2-се интернат-мәктәп Башҡорт республика гимназия-интернаты булып инновацион режимда эш башлай. "Ябай мәктәп нигеҙендә башҡорт гимназияһы асайыҡ, үҙебеҙҙең милләт балалары уҡыһын өсөн яңы, заманса шарттар булдырыу өсөн көрәшәйек. Башҡорт гимназияһында телебеҙ ҙә ҡәҙерлерәк булыр", - тип йөрөүселәрҙең береһе - Фәүзиә Маннан ҡыҙы була. Яңы режимда эшләй башлаған гимназияла тәрбиә эшен яйға һалыу өсөн дә тәжрибәле уҡытыусының ярҙамы, көсө, аҡылы кәрәк була. Оло йөрәк, сабыр аҡыл талап иткән тынғыһыҙ эште, интернаттың өлкән тәрбиәсеһе сифатында, халыҡ педагогикаһына таянып башлап ебәрә ул. "Юрматы шәжәрәһе", "Сәсәндәр тирмәһендә", "Нардуған", "Сөмбәлә", "Йыйын", "Науруз", "Башҡорт халыҡ аштары", "Атай - ғаилә терәге" кеүек әллә күпме йолалар тергеҙелә. 1999 йылда үткәрелгән сараларҙың эшкәртмәләре "Дәрестәрҙә һәм тәрбиәүи сараларҙа халыҡ педагогикаһы ҡанундарын ҡулланыу" тигән баш аҫтында йыйынтыҡ-ҡулланма булып донъя күрә. Фәүзиә Маннан ҡыҙының эш тәжрибәһе йәнә лә республикаға таратыла.

Ишембай ҡалаһы мәғариф тарихына республика кимәлендәге берҙән-бер тәжрибә булараҡ яҙылған тағы бер яңылыҡ Фәүзиә Маннан ҡыҙының исеме менән бәйле. Ул - Халыҡ мәғарифы музейы һәм уның эшмәкәрлеге. 2001 йылда уны яңы асылған музейға эшкә саҡыралар. Ошонан башлап ул район мәктәптәренең йылъяҙмаһын яҙыу эшенә тотона. Был бик сетерекле, күп ваҡыт талап иткән яуаплы эш. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы уҡытыусыларҙың, яугирҙарҙың ғаиләләрендә һаҡланған хаттарын, тылда фиҙаҡәрлек күрһәткән мөғәллимдәр, ҙур наградаларға лайыҡ булған мәғариф хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар династияларҙы хаҡында Ишембай, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларындағы адрестар буйынса йөрттан-йөртә йөрөп мәғлүмәттәр йыя. Районың "Алға", "Восход", "Башҡортостан вышкаһы" гәзиттәренең архивтарҙа һаҡланған тупланмаларын өйрәнә.

Башлаған һәр эшен ерено еткереп эшләргә өйрәнгән Фәүзиә Маннан ҡыҙы музей өсөн йыйған материалдарын да китап итеп туплай. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған "Ради жизни на земле" ("Ерҙә йәшәү хаҡына") тип исемләнгән китап - Фәүзиә Маннан ҡыҙының баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте. Был йыйынтыҡ республикала яугир-уҡытыусыларҙың исемен тергеҙеү һәм мәңгеләштереү буйынса эшләнгән берҙән-бер тәжрибә өлгөһө булараҡ та ҡиммәт.

Ишембай районы мәғарифы тарихында тәрән эҙ ҡалдырған уҡытыусылар хөрмәтенә иҫтәлекле таҡтаташ асыу кеүек мөһим эштең дә инициаторы - Фәүзиә Маннан ҡыҙы. Был таҡтаташтар - Фәүзиә Маннан ҡыҙының фиҙаҡәр хеҙмәте менән мәңгеләштерелгән, быуындан-быуынға тапшырыла торған мәңгелек Хәтер. Шулай уҡ уның инициативаһы менән 2014 йылда үҙенең тыуған ауылы Иҫәкәйҙә - Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, яу яландарында ятып ҡалған һәм хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарға, 2022 йылда тыл хеҙмәткәрҙәренә арналған һәйкәлдәр асылды. Һәйкәлдәр халыҡ көсө менән һалынһа ла Иҫәкәй ауылы халҡы яугир атай-олатайҙарыбыҙҙың хәтерен мәңгеләштереү монументаль композиция өсөн Фәүзиә Маннан ҡыҙына рәхмәтле.

Оло юбилейын да ҙур ваҡиға - "Быуындан - быуынға..." исемле электрон китабы менән ҡаршыланы тынғыһыҙ Фәүзиә Маннан ҡыҙы. Әйткәндәй, үҙенең тынғыһыҙ холҡо тураһында бына нәмә ти ул: "Мин көн дә бер нәмә эшләмәһәм, ғүмеремде бушҡа үткәргәндәй тоям. Тыуған төйәгемдең, халҡымдың тарихы менән ҡыҙыҡһынам, үҙ еребеҙҙә аяныслы яҙмышҡа дусар ителеүебеҙгә тыныс ҡына ҡарай алмайым. Ауыр, ләкин һоҡланғыс тарихыбыҙҙы күберәк белергә һәм белгән-өйрәнгәндәремде йәш быуынға еткереп ҡалырға тырышам, был - минең күңел талабым. Районыбыҙҙың арҙаҡлы кешеләре хаҡында яҙған мәҡәләләремде яратып уҡыуҙары тураһында әйтеүҙәре ҡәнәғәтлек хисе тыуҙыра. Тарих йәшәргә, быуындан-быуынға тапшырылырға тейеш".

Фәүзиә Маннан ҡыҙы - булмышы, асылы менән уҡытыусы. Ысын уҡытыусы. Осрашыу барышында уның йөҙөндә Сабырлыҡтың, Аҡылдың, Әҙәплелектең Үҙен күргәндәй булдым. Уның ғүмер юлы, хеҙмәт биографияһы уйлыға уй бүләк итте. Тик бер нәмә аптыратты: уҡытыусы эшен дөрәжә итеп ҡабул итеүме был, артыҡ ныҡ әҙәплелек, артыҡ ныҡ баҫалҡылыҡмы - ғүмере буйы район мәғарифына фиҙаҡәр хеҙмәт иткән уҡытыусының Маҡтау ҡағыҙҙарынан башҡа, исмаһам, "Мәғариф отличнигы" тигән дә маҡтаулы исеме юҡ! Эшләгән эше, район алдындағы күрһәткән хеҙмәттәре өсөн ҙур-ҙур исемдәргә күптән лайыҡ ине бит Фәүзиә Маннан ҡыҙы! Бөгөн дәрәжәле исемдәрҙе уңға-һулға кәнфит ҡағыҙы урынына тараткан бер дәүерҙә уҡытыусының эшләгән эшенә бәрәбәр хөрмәт күрһәтелмәүе, ысынлап та, башҡа һыйырлыҡ түгел. Уҡытыусының хеҙмәт күрһәтеүсе генә булып ҡалыуы, абруйы төшөүе ошондай иғтибарһыҙлыҡтан, ваҡытында тейешле хөрмәт күрһәтә белмәүҙән башланмаһымы икән? Ә үҙен яҡлап һүҙ әйтеүҙе, эшләгән эше өсөн хаҡ һорауҙы, дәрәжәләр юллауҙы Фәүзиә Маннан ҡыҙы күҙ алдына ла килтерә алмай. Әйткәндәй, юбилейы айҡанлы Фәүзиә Маннан ҡыҙы "Ишембай районы алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. "Миҙал үҙ Геройын тапты... Ниндәйҙер наградаға лайыҡ булыр өсөн Ишембай районының легендаһына әйләнгән Остазыбыҙ 90 йәшенә етергә тейеш булғандыр, күрәһең", - тип әсенеп ултырҙым уның күкрәген биҙәгән миҙалға ҡарап... Ә етмәгән булһа...

**Гәлиә МИҘХӘТОВА.**

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# ПОДЪЕЗД АЛДЫ ШАУ СӘСКӘ...



**Ҡалала күп фатирлы йорттарҙың подъезды алдындағы ус аяһындай ғына ерҙе лә гөл итеп тотҡан кешеләр була. Ғәҙәттә, был эш менән өлкән йәштәге инәйҙәр шөғөлләнә. Әммә уларҙың эшен дауам итеүсе йәштәр ҙә бар икән. Мәҫәлән, "Тамыр" телеканалының "ӘЮЯ ҡаласығы" тапшырыуындағы Хәрефбикә - Лилиә ДӘҮЛӘТБАЕВА ла, ерҙе буш ятҡырырға яратмайым, ти.**

➔ **Йәш кешенең өйөндә үҫентеләр үҫтереп, ҡала йорто алдындағы ерҙә соҡоноп йөрөүе ғәҙәти күренеш түгел. Баҡса эшен шулай ятаһығыҙмы?**

- Баҡса эше миңә ял бирә. Бәләкәй саҡта әсәйгә ярҙам итә инек, колонканан һыу ташыйбыҙ, сүп утайбыҙ. Аҙаҡтан инде Өфөнөң шауылы тормошонан, эштән онотолоп торорға булышлыҡ иткәнен аңлап ҡалдым. Күңел талабы минең өсөн, башҡаса ял итә алмайым. Бәпәй көткән саҡта ҡала фатирының тәҙрәһе төбөнә күп итеп үҫентеләр ултырттым. Аҙаҡтан инде оҡшап ҡалды. Әле лә әсәйемә, ҡәйнәмә алып ҡайтам, Белорет ҡалаһында үҙебеҙҙең йортобоҙ бар, унда ултыртам. Баҡса тултырып сәскәләр сәсәм.

Былтыр Өфөлә фатирыбыҙҙы алыштырғайныҡ, подъезд алды шау сәскә. Мин дә ҡыҙығып киттем. Әбейҙәр менән танышып алдым, улар миңә ер бүлеп бирҙе. Әбейҙәр мине ярата, мин уларҙы, бер-беребеҙҙе өйрәтәбеҙ, кәңәшләшәбеҙ. Йәштәр ҙә баҡса эшенә ылығыр икән, тип аптырайҙар.

➔ **Подъезд алдында ниндәй сәскәләрҙе үҫтереүе ҡулайлыраҡ?**

- Унда, ғәҙәттә, ҡояшлы урын табыуы ауыр, ә бөтөн үҫентеләргә лә яҡтылыҡ кәрәк. Етмәһә, минең өлөшкә төшкән ерҙең аҫтында торбалар урынлашҡан, шуға ла коммуналь хужалыҡ уны гел ҡаҙып, ремонтлап тора. Тимәк, күп йыллыҡ сәскәләрҙе ултырта алмайым. Цинния, бәрхәт гөлө, петуния үҫтерәм. Ҡарауы мәшәҡәт тыуҙырмаһын - төп талап шул. Декоратив сәскәләр бит наҙлы, уларға тәрбиә ныҡ кәрәк. Ә быларҙы сәсәһең дә, һыу һибәһең. Күләгәле ерҙә лә үҫәләр. Петунияны февралдә үк сәсәм. Тупраҡты дымлап, өҫтөнә орлоҡтар һипкәс, бер нисә урындан тишелгән полиэтилен менән ҡаплайым. Көн һайын бер тапҡыр асып, елләтеп алам. Аҙна тирәһендә шытып сыға. Унан инде пипетка менән генә һыу һибеп тораһың, сөнки йығылып, һәләк булыуҙары бар. Аҙаҡтан айырым һауыттарға күсереп ултыртып, яҙҙы көтә башлайһың.

Әле бына өйҙә цинния менән бәрхәт гөлө сәсеү мәле. Ҡырауҙар үткәс кенә уларҙы ергә күсереп ултыртырға кәрәк, алдараҡ сәсһәң, буйға һуҙыла, сибек була. Ҡыш йылы булған төбәктәрҙә күп йыллыҡ цинния ла үҫә, беҙҙә бер йыллыҡтарын сәсеү ҡулай, сөнки ул аҙ ғына һыуыҡҡа ла бирешә. Ә бына бер сәскә атып алһамы, ҡар яуғансы тиерлек ултыра. Сорттары күп төрлө, төҫтәре лә сағыу, эреһе, вағы ла бар - зауығығыҙға ҡарап һайлағыҙ.

Бәрхәт гөлө шулай уҡ әрһеҙ үҫемлек. Әле һыуыҡ ергә сәскәнсе, шулай уҡ өйҙә сәсеү яҡшыраҡ, тиҙерәк шытып сыға, тимәк, тиҙерәк сәскә атасаҡ. Ул, цинния һымаҡ уҡ, күсереп ултыртыуҙы һәйбәт кисерә. Ноябрь һыуыҡтарына тиклем ултыра. Беҙҙә уның бер төрләрәктәрен генә үҫтерәләр, ә былай һары һәм ҡыҙғылт һарынан тыш, ҡыҙылдары, көрәндәре лә була. Ике төҫлө итеп атҡандары матур. Аҡ төҫлө гибриды ла бар. Үҫентеләргә артыҡ һыу һипмәҫкә кәрәк, юғиһә, сирләйәсәк. Тупраҡ ҡороп та китмәһен. Кәбеҫтә эргәһенә сәсһәң, еҫе төрлө зарарлы ҡоротҡостарҙы ҡурҡытасаҡ.

Подъезд алдына декоратив көнбағыш та ултыртам. Уның 60 см, 1 м булып үҫкәндәре бар. Ҡала ерендә сәскә үҫтереүе ауыр түгел ул, тик бына матур сәскәләрҙе тамыры менән йолҡоп ала ла китәләр. Шулай итеп, кемгәлер сәскәләр үҫтереп тә "бирергә" тура килә...

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**"Мәшәҡәтле булһа ла, ҡаҙ үрсетеү бик отошло, - ти Фәймә апай Сәлимова. - Ҡаҙ өмәләрендә "ҡауырһыны - ҡауырһынға, йөнө - мендәргә, тәпәйҙәре - кәрзингә, ҡанаттары - запасҡа", тип һамаҡлағандағы кеүек, ҡаҙҙың бер нәмәһе лә ташланмай беҙҙең ғаиләлә. Тауыҡ, бройлер, күркә һымаҡ йорт ҡоштарының башын, тәпәйен, йөнөн тотонмайҙар беҙҙең яҡта, ә ҡаҙҙыҡы барыһы ла ҡулланыла. Мин үҙем баш, тәпәй, бөрләтәүҙәрен һалып, ҙур бәлеш бешерәм. Майын иретеп, маргарин урынына ҡулланам, башҡа маҡсатта ла ҡулланырға мөмкин. Мәҫәлән, күн итеккә ҡаҙ майын һөртһәң, аяҡ кейеме оҙағыраҡ һаҡлана. Мамығынан мендәр эшләйем. Үҙебеҙҙең балаларға, уларҙың балаларына эшләп биреп бөттөм. Хәҙер таныштар ҡыҙҙарына бирнәгә заказ бирә. Шуға күрә ҙур теләк менән, бик яратып ҡарайым ҡаҙ бәпкәләрен. Шөғөлөң күңелгә кинәнес биреүҙән тыш, килем дә килтерһә, икеләтә ҡыуаныс".**

# МӘШӘҠӘТЛЕ, ӘММӘ ОТОШЛО



Ниндәй генә осорҙо алма, ауыл кешеһен шәхси хужалыҡһыҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Йәй ныҡ ҡоро килгән йылдарҙа ҡош-ҡорт аҫрау ҡыйбатҡа төшә, сығымдарҙы аҡламай, тип, Фәймә Ғәйзулла ҡыҙы ла ҡаҙ бәпкәһен алмай башлай. Әммә бер нисә йыл элек ятатҡан шөғөлөн яңынан тергеҙгән. Тик хәҙер ул себеш һатып алмай, ә инкубаторҙа үҙе сығара.

- Быйыл бер ата, өс инә ҡаҙ алып ҡалдым. Йомортҡа һалыр алдынан бер ай самаһы яҡшы итеп ашатам, рациондарын төрләндерәм. Әле бына инкубаторға 40 йомортҡа һалдым. Бер айҙан кәмендә 30-35 бәпкә сығыр тип өмөтләнәм. Улар сығыу менән инәләрен айырып, бәпкәләрҙе ата ҡаҙға ҡушып ебәрәм. Инәһен айырмаһаң, бәпкәне ҡарамаясаҡ. Халҡыбыҙҙа "Атай - ата ҡаҙ" тигән әйтем бар. Ҡайҙан килеп сыҡҡандыр ул был кинәйә. Бына нисә йыл күҙәтәм: киреһенсә, инкубаторҙан сыҡҡан бәпкәләрҙе инәләре бар тип тә белмәй, шуға уларҙы айырып, бер аҙ һимергәс, һуйҙырам. Ә ата ҡаҙ себеште бейеп ҡаршы ала. Көҙгә тиклем һаҡлап-ҡурсып үҫтерә, - ти тәжрибәле ҡаҙ үҫтереүсе.

Бәпкә һатып, килем алғаны юҡ Фәймә апай. Уның ҡарауы, ҡаҙҙы ашатыу, ҡарауға бәйле төрлө һорау менән мөрәжәғәт иткәндәргә кәңәш менән ихлас ярҙам итә.

- Һатып алғанда бәпкә нисә көн булыуына ҡарамаҫтан, теремек, эсе йомшаҡ булырға тейеш. Һатыусынан уның ниндәй шартта йәшәүен мотлаҡ һорашығыҙ. Сәләмәт ҡошсоҡтар тауышҡа ныҡ тәьҫир итеүсән. Шуға күрә уларҙы ҡурҡытырға ярамай, бәләкәй сағында ҡурҡһа, ауырып китергә, хатта үлергә мөмкин. Алған ваҡытта бойоҡ күренһә, тимәк, улар сирле, шуға күрә шикле булып күренһә, алмағыҙ, аҡсағыҙҙы әрәм итмәгеҙ. Арты еүеш, һаҫыҡ еҫ булһа, ашҡаҙан-эсәк юлы проблемаһы булыуы ихтимал. Ете көнлөк бәпкә алырға тырышығыҙ. Ныҡ бәләкәй булһа, юлда үлеүе мөмкин. Йөнөнә лә иғтибар итегеҙ: йомшаҡ, ҡоро икән, тимәк, себештәр сәләмәт. Асыҡ һәм таҙа күҙҙәр ҙә - һаулыҡ билдәһе, - ти Фәймә Ғәйзулла ҡыҙы.

Бәпкә торған урын ҡоро, йылы, таҙа булырға тейешлеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды:

- Ҡошсоҡтар ашаған, эскән һауытһабаға уларҙың тиҙәге төшмәһен, был уларҙы һәр төрлө инфекциянан һаҡлар. Ҡауырһындары ҡалҡҡансы, ысыҡ, ямғыр һыуынан һаҡлағыҙ, ашатыуға ҙур иғтибар бирегеҙ: тәүге көндәрҙә махсус ҡатнаш аҙыҡ, йомортҡа, эремсек, геркулес, тары ярмаһынан бутҡа. Үлән ашай башлағас, кесерткән турап бирегеҙ, уны аҙыҡҡа ҡушып та, айырым да бирергә мөмкин. Ҡаҙ - һыу ҡошо. Алдынан һыу өҙмәгеҙ, йөҙәрлөк йылға булһа, тағы ла яҡшыраҡ...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**
**Мәләүез районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың алтынсы ысулы: киләсәк ҡартлығың өсөн аҡса тупла.

- Һәр кемдең ғүмере балалыҡтан ҡартлыҡҡа тиклем юл үтә. Хоҙай төҙәтмә индермәһә, был юлдан берәү ҙә ситкә тайпыла алмай. Шуға ла һәр кем алдан уҡ үҙенең ҡартлығы тураһында уйларға һәм ул осорға күпмеләр аҡса тупларға, шулай уҡ үҙ ғаиләһенең киләсәге өсөн дә хәстәрләргә бурыслы. Был иҫкәртеү һеҙҙе киләсәк өсөн дә көшөлөгөгөҙҙө тултырып ҡуйырға өйрәтергә тейеш - Аркад алтынсы дәресендә үҙенең уҡыусыларына шулай тип өндәшә һәм тағы дауам итә:

- Үҙ белеме һәм байығыу ысулдарын яҡшы үҙләштереүе арҡаһында кеше ни тиклем күберәк байлыҡ туплаған һайын, киләсәк көндәре тураһында ла күберәк уйларға тейеш. Ул байлығының билдәле бер күләмен ябай булмаған ҡартлыҡ көндәре өсөн бүлеп ҡуйырға, уны хәүефһеҙ һаҡлау юлын билдәләргә бурыслы. Быны төрлө юлдары бар. Кеше аҡсаһын ниндәйҙер урынға йәшереп ҡуя ала. Ләкин нисек кенә ышаныслы йәшерелмәһен, ул байлыҡтың уғрылар ҡулына эләгеүе бик ихтимал. Шуға ла мин был юлды кәңәш итмәйем. Аҡсаңды ышаныслы һаҡлау маҡсатында йорттар һәм ерҙәр һатып алыу отошлораҡ. Киләсәктә уларҙы һатып, байтаҡ килем алырға мөмкин буласаҡ.

Шулай итеп... Ҡартлыҡ көнөңдә көшөлөгөңдөң буш булыуы - иң ҙур трагедия ул. Шуға ла һин ҡулыңда булған алымдарҙы отошло файҙаланырға тырыш. Яҡынлашып килгән ҡартлыҡ көнөңдәге ихтыяждарыңды һәм мохтажлыҡтарыңды алдан уҡ күрергә һәм хәстәрләргә өйрән.

## Байығыуҙың етенсе ысулы: "Аҡса эшләү һәләтлегеңде күтәр"

- Бөгөн мин һеҙҙең менән аҡса тураһында түгел, ә һеҙҙең үҙегеҙ, уңыш ҡаҙаныуға йә иһә уңышһыҙлыҡҡа илтеүсе ҡараштарығыҙ, мөнәсәбәттәрегеҙ тураһында һөйләшергә теләйем, - тип мөрәжәғәт итә етенсе көндө Аркад уҡыусыларына.

- Күптән түгел миңә бер йәш кеше килде һәм бурысҡа аҡса биреп тороуымды үтенде. Был аҙымға уны нимә этәреүен һорағас, ул: "Барлыҡ тотоноуҙарымды ҡаплар өсөн эш хаҡы ғына етмәй", - тип яуап бирҙе. Ә мин уға бурысын ҡайтарыу өсөн өҫтәмә резервтары булмау арҡаһында үҙ кредиторҙары өсөн насар клиентҡа әйләнеүен аңлатып бирҙем. Шунан: "Һиңә күберәк аҡса эшләргә өйрәнергә кәрәк, үҙеңдең аҡса табыу һәләтлегеңде күтәреү өсөн нимә эшләйһең?"- тип һораным.

- Мин үҙем булдыра алғандың барыһын да эшләйем,- тип яуапланы ул. - Айына алты тапҡыр хужама барып, минең эш хаҡымды күтәреүҙе талап итәм. Ләкин һөҙөмтә юҡ. Минән башҡа берәү ҙә был мәсьәләне хужаһы алдында шул тиклем йыш һәм ныҡышмалы күтәрә алмаҫ ине...

Беҙ был егеттең берҡатлылығына көлә алабыҙ, әлбиттә. Ләкин һеҙ шуға иғтибар итегеҙ: был егет байығыу өсөн кәрәкле төп шарттарҙың береһен яҡшы белә. Унда күберәк аҡса эшләүгә ынтылыш бар.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



## 24 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 0.10, 1.20, 2.05, 2.50, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.50 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Преград. Net. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Специальный репортаж. [12+]
18.00 "Бай". [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Я ушла на войну". "Ано тв-Новости". [16+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.15 Спектакль "Красный Паша". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]

## 25 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
17.00 "Автограф". [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Елкән. [6+]
19.00 Брифинг.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Вечерний телецентр.
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
23.30 Бәхетнамә. [12+]
0.45 Спектакль "Хаджи Эфенди женится". [12+]
2.45 Бай. [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

## 26 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
10.30, 17.45 История одного села. [12+]
10.45 Әлләсе... [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 МузКәрәҙ. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.30 Бәхетнамә. [12+]
0.45 Спектакль "Сваха". [12+]
2.45 "Автограф". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

## 27 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 "45-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное закрытие".
3.10 Х/ф "Зойкина любовь". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Алтын тирмә". [0+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00 Автограф. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Сулпылар. [0+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Этно-краса. [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!.." [12+]
3.00 История одного села. [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]

## 28 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.55 "Вызов. Первые в космосе". [12+]
0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
3.25 Х/ф "Свой-Чужой". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]
12.45, 2.30 Үткән гүмер. [12+]
13.15 Ҡурай даны. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).
13.45 Аплодисменты. [12+]
15.00 "АйТекә!" [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Патриот РФ. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 3.00 "Ҡурай даны". [12+]
19.00, 3.15 Честно говоря. [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.15 Специальный репортаж. [12+]
22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Спектакль "Любовница. [12+]
4.00 "Ете егет". [12+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Тормош. [12+]

## 29 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.10 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/с "Рюриковичи". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
19.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф Премьера. "Эйфель". История создания символа Парижа. [16+]
1.50, 2.35, 3.15, 3.50, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Х/ф "Токсичная любовь". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Очень плохая невеста". [12+]
0.40 Х/ф "Добежать до себя". [12+]
3.50 Х/ф "Белое платье". [16+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Это моя профессия. [12+]
9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Этно-краса. [6+]
11.00 МузКәрәҙ. [0+]
11.30 "Байтус". [6+]
11.45 "Семәр". [0+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Спектакль "Аҡ ҡалфаҡ". [12+]
19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 3.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Концерт заслуженной артистки РБ Лилии Биктимировой. [12+]
2.00 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]
4.15 Д/ф "Я ушла на войну". [16+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

## 30 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.30, 1.15, 1.55, 2.35, 3.10, 3.45, 4.20, 4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/с "Рюриковичи". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 Премьера. Международный конкурс песни на русском языке "Автора!" Финал. [12+]

### РОССИЯ 1
6.15, 3.10 Х/ф "Личные счеты". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Петросян-шоу. [16+]
15.00 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Любовь для бедных". [12+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [12+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.30 "Дорога к храму". [0+]
16.00, 4.45 Историческая среда. [12+]
16.30 "Честно говоря". [12+]
17.15 Әлләсе... [6+]
18.00 "Укытыусыма". [0+]
20.00, 4.15 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.30 Спортивная история. [12+]
21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Бенефис народной артистки РБ Альфии Каримовой. [12+]
1.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]
5.15 "Млечный путь". [12+]

✓ *Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр, йыуаш кешене һүҙ баҫыр.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЯҘ ҺӘМ ХЕҘМӘТ БАЙРАМЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Уймаҡ. Ямаулыҡ. Аҫҡын. Торҡа. Күңел. Мырҙа. Күнәк. Рәхим. Ашлама. Елкән. Эт. Тәгәс. Бала. Йүкә. Ғилем. Елек. Каса. Туй. Көй. Нәҫер. Маҡбал. Нейтрон.
**Вертикаль буйынса:** Кейемһеҙ. Төнлөк. Ре. Карнай. Ятаҡ. Уҙаман. Амбар. Урама. Эйәк. Килбәт. Ҡыҙҙар. Бөкө. Айгөл. Ҡаҡ. Он. Кер. Таған. Әлкә. Илгә. Ләм. Семәр.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 май "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+
**5 май "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 май "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 18.00 16+
**3 май "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 0+
**5 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 12+
**6 май "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим, З. Бураҡаева инсц.), хикәйәт. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**1 май "Три поросенка"** (Д. Гараева). 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 май "Ышанам, һин ҡайтырһың",** концерт. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 май "Дөрөҫлөк беҙҙең яҡта..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.30 6+
**5 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, Р. Әйүпов инсц.). 13.00, 15.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 май "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 18.00 6+
**7 май "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**4 май Премьера! "Яу ҡупҡас"** (З. Усманова), пластик спектакль. 12+

### БР Милли музейы

**5 май** Ротанг үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (11) дүшәмбе | 4:10 | 5:40 | 13:30 | 18:36 | 20:47 | 22:17 |
| 2 (12) шишәмбе | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 18:37 | 20:49 | 22:19 |
| 3 (13) шаршамбы | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 18:38 | 20:51 | 22:21 |
| 4 (14) кесе йома | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 18:39 | 20:53 | 22:23 |
| 5 (15) йома | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 18:40 | 20:55 | 22:25 |
| 6 (16) шәмбе | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 18:41 | 20:56 | 22:26 |
| 7 (17) йәкшәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 18:42 | 20:58 | 22:28 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Ошо көндәрҙә Учалы районы Әүешкүл ауылында йәшәүсе ҡәҙерлеләребеҙ - Әлфизә менән Марат Сәйфетдиновтарҙың татыу ғаилә ҡороуына 45 йыл тула.

Йәмле май айында ҡауышып, мөхәббәтле, татыу ғүмер кисергән атайыбыҙ менән инәйебеҙгә рәхмәттәребеҙ сикһеҙ! Балаларына, туғандарына, ауылдаштарына өлгө булып, бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап, ауырлыҡтарҙы бергә еңеп, мал-тыуар тотоп, баҡса үҫтереп, гөрләтеп донъя көтә улар. Әсәйебеҙ Әлфизә Мофассал ҡыҙы - барлыҡ ғүмерен балалар тәрбиәләүгә арнаған ветеран уҡытыусы. Уның уҡыусыларының байтағы филолог һөнәрен һайлаған, улар араһында уҡытыусылар, журналистар, дәүләт хеҙмәткәрҙәре, сәнғәт кешеләре байтаҡ. Илебеҙҙең, донъяның төрлө тарафтарына таралышҡан уҡыусыларынан туған телгә, тыуған еребеҙгә һөйөү уятҡаны өсөн рәхмәт һүҙҙәре ишетеү иң ҙур бәхет уның өсөн!

Атайыбыҙ Марат Ишморат улы ла матур хеҙмәт юлы үткән - ҡайҙа ғына эшләһә лә, шахталамы, Себер тарафтарындамы, совхоз баҫыуҙарындамы - һөнәре буйынса водитель булған атайыбыҙ хеҙмәттәштәре араһында эште теүәл, еренә еткереп башҡарыуы, ғәҙеллеге, уңғанлығы, тура һүҙлелеге менән хөрмәт яуланы. Бөгөн атайыбыҙ менән инәйебеҙ 2 ейәнсәре, 4 ейәне өсөн һөйөнөп, бәхеттә, шатлыҡта ғүмер итә - гел шулай булһын! Балаларының ғына түгел, туғандарының да кәңәшсеһе, терәге булған ҡәҙерлеләребеҙгә ныҡлы һаулыҡ, тыныс, мул тормош, аҡ бәхеттәр теләйбеҙ!

**Барлыҡ балалары исеменән ҡыҙҙары Луиза Сәйфетдинова.**

✔ *Был комедияның ни өсөн "Еҙнәкәй" тип аталыуын башта бер нисек тә аңлап етә алмай инем. Еҙнәкәй тип бик яҡын, туған булып бөткән кешегә әйтәләр бит инде. Ә пьесала геройға былай тип бер тапҡыр ғына өндәшәләр.*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# "ЕҘНӘКӘЙ" ЙӘНӘ СӘХНӘЛӘ!

**Ошо көндәрҙә Хәбибулла Ибраһимовтың "Еҙнәкәй" музыкаль комедияһы М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында йәнә яңырыу кисерҙе. Был спектакль тәүге тапҡыр Вәли Гәлимов тарафынан 1946 йылда, унан һуң 1953 йылда - Арыҫлан Мөбәрәков, 1983 йылда Вәзих Сәйфуллин режиссерлығында сәхнәгә сығарыла. Бына 40 йыл үткәс, музыкаль комедияны режиссер, Ш. Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев баш ҡала тамашасыларына тәҡдим итте. Сағыу кейемдәр, ҡәмит ролдәр һәм йыр-мәҙәккә бай диалогтарға шығырым тулы тамаша залы ихлас көлөп, бер быуат элек булған хәл-ваҡиғаларҙың бөгөн дә ниндәйҙер кимәлдә актуаллеген һис юғалтмауына, ҡинәйә-ишараларға хайран ҡалып, ҡәнәғәт ҡайтты. Шәп тамашаның ҡуйыусы режиссеры Илсур Юлай улының үҙе менән премьеранан һуң әңгәмәләшергә форсат таптыҡ.**



**Театрҙың алтын фондына ингән спектаклдәр байтаҡ, ни өсөн тап "Еҙнәкәй" спектакленә мөрәжәғәт итергә булдығыҙ?**

- Театр репертуарына комедиялар гел кәрәк, үҙебеҙҙең шундай йырлы-моңло классик әҫәрҙәргә яңы һулыш биреп, сәхнәгә сығарғыбыҙ ҙа килә. Беҙ ҡуймаһаҡ, ул спектаклдәрҙе кемдәр ҡуйыр? "Еҙнәкәй" музыкаль комедияһы тамашасыға тормош ығы-зығыһынан бер аҙ арынып, ихлас көлөп, күңелен күтәреп, ял итеп ҡайтһын өсөн тәғәйенләнгән. Уның йөкмәткеһендә ниндәйҙер тәрән мәғәнә һалынмаған. Әммә репертуарға шундай спектаклдәр ҙә кәрәк, гел генә социаль проблемалар күтәргән, фәлсәфәүи әйберҙәр ҡуйып булмай бит инде. Бына шундай уй менән Хәбибулла Ибраһимовтың театрыбыҙ бер нисә тапҡыр сәхнәләштергән был пьесаһын һайлап алдыҡ.

Пьесаны тәүге уҡығандан алып спектакль тулыһынса әҙер булғанға тиклем йылдан ашыу тирәһе ваҡыт үтеп китте, сөнки төрлө сәбәптәргә бәйле премьера кисектерелә килде. Ҡуйыусы төркөм составы ла был осорҙа үҙгәреш кисерҙе, актерҙарҙы ла кемеһен баштан уҡ, кемеһен һуңыраҡ ролдәргә тәғәйенләнем.

Ғиззәт роленә театрыбыҙҙың йәш актеры Алмаз Йосопов уйнай, шулай уҡ төп ролдәрҙә билдәле актерҙар Хәрмәтулла Үтәшев, Илсөйәр Ғәзетдинова, Алмас Әмиров, Светлана Хәкимова, Минзәлә Хәйруллина, Илсур Байымов, Артур Ҡунаҡбаев һәм йәш актерҙар башҡара. Миһри ҡарсыҡ образын сәхнәгә Урал Әминев сығарҙы. Был персонаждың һүҙҙәрен һәм спектаклдәге урынын үҙгәртеп бирҙек. Хәбибулла Ибраһимовтың "Башмағым" пьесаһының бер вариантында ла Миһри ҡарсыҡ кеүек яусы әбей бар һәм заманында уны Биктимер Муллабаев уйнаған, тағы ла "Шәүрәкәй" спектаклендәге күрәҙәсе, өшкөрөүсе ҡарсыҡты Алмас Әмиров уйнаны. Бына шундай ҡыҙыҡ бер йолаһы, тип әйтәйемме, мин дә боҙмаҫҡа булдым һәм был ролде Урал Әминевҡа тәғәйенләнем. Сөнки театр барыбер ҙә йыйылма образдар менән эш итә, ә комедияла кешеләрҙең һыҙаттары тағы ҡабартыбыраҡ бирелә.

**Спектакль геройҙарының кейемдәре, тышҡы ҡиәфәттәре, хәрәкәттәре, сәхнә биҙәлеше лә үҙенсәлекле, сағыу күренде. Был идея ҡайҙан барлыҡҡа килде?**

- Барыһын да ҡуйыусы рәссам Рөстәм Баймөхәмәтов, хореограф Ольга Даукаева, яҡтылыҡ буйынса рәссам Илшат Саяхов һәм композиторҙар менән берлектә кәңәшләшеп эшләнек. Билдәле булыуынса, спектаклдәге ваҡиғалар революцияға тиклем бара, сөнки унда һаман да байҙар һәм ярлыларға бүленеш бар. Коллегалар менән шул осорҙарҙа илебеҙҙә генә түгел, ә донъяла ниндәй ваҡиғалар, ниндәй мода өҫтөнлөк итеүен өйрәндек һәм ошондай ҡарарға килдек. Сөнки НЭП ваҡытында ла шундайыраҡ стилдә кейенгәндәр. Спектаклдәге ҡайһы бер геройҙарҙың кейенеү рәүеше, бәлки, Өфөгә ул заманда килеп етмәгән булғандыр ҙа, ни тиһәң дә, провинциаль ҡала булған. Әммә Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларҙа, сит илдәрҙә бындай мода киң таралған. Шуға үҙебеҙҙе аныҡ бер урынға бәйләргә һәм сикләргә теләмәнек. Пьеса авторы ла был ваҡиғалар ҡайҙа барғанлығын яҙмай, унда хатта ике ҡала араһында поезд йөрөнө лә, телеграммалары артынан үҙҙәре машинала тиҙ генә килеп етә алалар. Бына шуның менән файҙаландыҡ та инде һәм авторҙың идеяһын кинәрәк ҡулланырға, шул осорға хас мода, бейеүҙәрҙе, уй-кисерештәрҙе сағылдырырға тырыштыҡ.

**Ҡәмит булһа ла, уйландыра торған урындары ла бар. Геройҙарҙың холоҡ-фиғеле, тормош хәлдәре бөгөн дә йәмғиәтебеҙҙә күҙәтелгән кеүек...**

- Әлбиттә, ниндәй генә спектакль булмаһын, ул әлеге ваҡыттағы кисерештәргә сағылдыра. Был комедияның ни өсөн "Еҙнәкәй" тип аталыуын башта бер нисек тә аңлап етә алмай инем. Еҙнәкәй тип бик яҡын, туған булып бөткән кешегә әйтәләр бит инде. Ә пьесала геройға былай тип бер тапҡыр ғына өндәшәләр. "Нимәне аңлата икән һуң был еҙнәкәй?" - тигән һорау менән башлағайным, үҙебеҙсә бер һығымтаға килдек, ул - мәмәйлек, йыуашлыҡ. Быға тиклем сәхнәләштерелгән спектаклдәрҙә режиссерҙар баҫымды нимәгә яһағандыр, белмәйем. Әммә мин геройҙың бына ошо йыуаш холоҡло булыуын, шул арҡала төрлө ҡатмарлы, ҡыҙғаныс, ҡыҙыҡ хәлдәрҙә ҡалыуын күрһәтеүҙе маҡсат иттем. Ул кәрәк ваҡытта үҙ фекерен асыҡ әйтә алмағаны арҡаһында бик күп ҡыҙҙарҙың сигелгән ҡулъяулыҡтарын да йыйып ала, башҡаларға мәшәҡәт тә тыуҙыра. Миһри ҡарсыҡ та был турала бик күп тапҡыр һүҙҙәр әйтә. Комедия булһа ла, тамашасыларға еткерергә теләгән фекерҙәребеҙ бик күп һәм спектаклде килеп ҡараусылар быны аңланы.

**Ни өсөн театрҙар "Еҙнәкәй" кеүек элек яҙылған пьесаларға йыш мөрәжәғәт итә? Киләсәктә классик әҫәргә әүерелерҙәй яңы пьесалар ҙа юҡ түгелдер бит?**

- Беренсенән, хәҙерге ваҡытта телдә белгән яҙыусылар һирәк, ҡыҙғаныс күрә. Ҡайһы берҙә классик әйберҙәрҙе уҡығанда уларҙың логика ягынан етешһеҙлектәрен күрһәк тә, шул тиклем һутлы, бай тел менән яҙылыуына хайран ҡалабыҙ. Был йәһәттән хәҙерге пьесалар бик үк маҡтана алмай. Беҙ, режиссерҙар, хирург һымаҡ, оҙон һөйләмдәрҙе киҫеп ташларға, алып ырғытырға ғына торабыҙ бит инде, һүҙ бутҡаһы бешермәйек тип. Әммә өлкәнерәк йәштәге актерҙар: "Һүҙҙең тәме бар бит, киҫмәгеҙ, матур яңғырай", - тиһәләр, килешәм. Беҙ бит хәҙер тормошта улайтып һөйләшмәйбеҙ хатта, күп һүҙәр телмәрҙән төшөп ҡалып, онотолоп та бөткән. Тамашасылар спектаклде ҡараған сакта был хәҡта уйлап өлгөрәме икән, белмәйем, ләкин шундай моңло телмәрҙе тыңлауы рәхәттер. Шулай уҡ элек яҙылған һәм бер нисә быуын тамашасыһының тәнҡитен ишеткән, улар тарафынан юғары баһаланған әҫәрҙәр бер ҡасан да актуаллеген, ҡыҙығын юғалтмай. Былар бөгөн актуаль булып, иртәгә нисек яңыртырға маташһаң да, яңы һулыш бирер булмаған әйберҙәр кеүек түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Еҙнәкәй" спектакле бар яҡлап та күҙҙәрҙең яуын алырлыҡ тамаша: геройҙарҙың кейемдәре лә, холоҡтары ла сағыу, тауыштары моңло, тормоштары ла ялтырауыҡлы. Шундай әкиәти, мәҙәк донъяға күҙ һалырға теләүселәр театрҙың 103-сө миҙгеле ябылмаҫ элек спектаклде май айында килеп ҡарап өлгөрә ала. Кәйефтәрҙе күтәрер музыкаль комедия был ҡуйылышында ла бик күп тамашасының һөйөүен яулар һәм ғүмере оҙон булыр, тиген теләктәбеҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АЯҒЫҢДЫ - ЙЫЛЫЛА,

### башыңды һалҡында тот

Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр, йыуаш кешене һүҙ баҫыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер эшҡыуар тәбиғәт ҡосағында ял итеп йөрөгәндә йылғала бәләкәй генә кәмәлә ҡармаҡ тотоп ултырған балыҡсыны күреп ҡала. Шул мәлдә генә балыҡсының ҡармағына ҙур балыҡ эләгә. Ошо табыштан һуң балыҡсы ҡармағын һыуҙан алып, кәмәһен ярға ишеп, өйөнә ҡайтырға йыйына башлай. Барыһын да күҙәтеп торған эшҡыуар унан бындай ҙур балыҡ эләктергәнсе күпме ваҡыт үтеүен һорай."Бер-ике сәғәт самаһы..." - тип яуаплай балыҡсы. "Улай булғас, нинә һин оҙаҡҡараҡ ҡалып, тағы ла ошондай бер нисә балыҡ тотмайһың?"- тип аптырап һорай эшҡыуар. "Иртәгәгә тиклем минең ғаиләмә бер балыҡ та етә", - була яуап. "Ә һин, ғөмүмән, көнөңдө ни менән үткәрәһең һуң?" - ти эшҡыуар. "Төшкә ҡәҙәре йоҡлайым, бер-ике сәғәт балыҡ ҡармаҡлайым, шунан балаларым менән уйнайым, ҡатыным менән аралашам, уға ҡайһы бер эштәрҙә ярҙамлашам, шунан урам буйлап сығып китәм, таныштар, дуҫтар менән аралашам, гитарала уйнап, йырлап та алабыҙ. Бына шулай, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәйем мин", - ти балыҡсы. "Һин дөрөҫ йәшәмәйһең, дуҫ кеше. Әйҙә, мин һине нисек дөрөҫ эшләргә өйрәтәм. Шунан башлайыҡ: һин көнө буйы балыҡ ҡармаҡла, уны һатып аҡсаға үҙеңә ҙур кәмә һатып ал..." "Ә шунан нимә эшләйем?" - тип һорай балыҡсы. "Шунан һин тағы ла күберәк балыҡ тота башлаясаҡһың һәм тағы ла бер кәмә, хатта корабль һатып ала аласаҡһың.." "Артабан нимә?" "Артабан иһә һин балығыңды аралашсы аша түгел, ә туранан-тура эшкәртеүсе заводҡа үҙең килтерен тапшыра башлаясаҡһың. Шунан инде үҙең асасаҡһың бындай заводты..." "Шунан нимә?" "Шунан инде һин үҙеңдең бәләкәй ауылыңды ҡалдырып, ҡалаға күсерһең, шунан үҙең асҡан фирманың директоры булып китерһең..." "Директор булғансы күпме ваҡыт үтәсәк инде?" "Ун биш-егерме йыл үтәсәк..." "Унан һуң нимә буласаҡ?" "Унан һуң тормошоңдоң иң күңелле мәле башланасаҡ. Һин үҙеңдең фирмаңды бер нисә миллионға һатасаҡһың һәм иң бай кешегә әүереләсәкһең". "Ә артабан?" "Һуңынан һин эшләүҙән туҡтайһың да, бәләкәй генә берәй ауылға күсеп, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәй башлайһың: төшкә ҡәҙәре йоҡлайһың, йылға буйында балыҡ ҡармаҡлайһың, балаларың менән уйнайһың, ҡатыныңа ваҡ-төйәк эштәрҙә ярҙамлашаһың, дуҫтарың һәм яҡындарың менән осрашып, гитарала уйнап, йырлашып ултыраһығыҙ..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 560